ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кисеке Өфө

28-6 февраль - март (шаҡай - буранай) 2015

№9 (635)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡорт батыры...**

тағы майҙан тота



3

**Тарихыңды беләһең икән...**



4

**Намыҫымды данға алыштырмам...**

йәки Депутат күңеленә сәйәхәт



8-9

**Һәр ваҡыт, һәр кайҙа...**

һәм һәр нәмәлә өлгөрөргә!



12-13

**ТВ-программа** 14

*Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуы һис кисекмәҫтән хәрби гарнизондар урынлаштырылған ҡәлғәләр менән ҡалалар төҙөүҙе талап итмәй. Тәүге осорҙа Башҡортостан Ҡаҙан аша идара ителә. Башҡорттар яһаҡты ла шунда илтә. Был өҫтәмә сығымдар һәм ауырлыҡтар тыуҙыра, сөнки түләү өсөн һәр яуаплы кеше яһаҡты үҙе алып барырға тейеш була. Ләкин ваҡыт үтеү менән башҡорттарҙың ерендә ҡала төҙөү зарурлығы бик ныҡ һиҙелә. Бының менән башҡорттар үҙҙәре лә, урыҫ хөкүмәте лә ҡыҙыҡһына башлай...*

*Ә.Н. Усманов.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡорт теленә һөйөүҙе һеҙҙә кем уятты һәм уны балаларығыҙға тапшыра алдығыҙмы?

***Эльвира РӘХИМОВА, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты доценты, филология фәндәре кандидаты***: Әсәйем Дәүләкән районы Ҡаҙанғол ауылында 40 йылдан ашыу башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән балаларға белем бирҙе. Ул һөнәре буйынса ғына түгел, ә бар булмышы менән туған телен яратҡан һәм беҙҙә лә башҡорт теленә ҡарата һөйөү уятҡан кеше. Үҙемдең уның юлын дауам итеп, башҡорт теле уҡытыусыһы һөнәрен һайлауым менән ғорурланам һәм уҡыусыларыма гүзәл телебеҙ тураһында күберәк белергә ярҙам итә алыуыма шатланам.

Өйҙә лә балалар менән тик башҡортса аралашабыҙ, башҡортса йырҙар тыңлайбыҙ, бергәләп китаптар уҡыйбыҙ. Сабыйҙың теле үҙенең туған телендә асылырға тейеш, сөнки һөйләшергә өйрәнгәндә ул һүҙҙәрҙе генә ҡабатламай, ә телмәрҙең милләтенә генә хас интонацияһын, моңон үҙләштерә. Шуға күрә, заман талабы, тигән һылтауға ышыҡланып, балалары менән тик урыҫ телендә генә һөйләшеүсе милләттәштәремде аңламайым да, ҡабул да итә алмайым. Улар араһында үҙҙәрен башҡорт теле өсөн йән атыусы итеп күрһәтеп тә, өйөндәге аралашыу теле итеп икенсе телде һайлаусыларҙың булыуы икеләтә аяныслы. Үҙ балаһында туған теленә һөйөү уята алмаған кешенең, башҡаларҙан быны талап итеп, ялҡынлы телмәрҙәр тоторға хаҡы юҡ.

***Фуат ЮНЫСБАЕВ, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:*** Һәр ата-әсәнең бурысы - балаһын ашатыу, кейендереү, физик һәм рухи яҡтан үҫтереү менән бер рәттән, туған теленә ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Беҙҙең өйҙә быны яҡшы аңлағандар һәм атай-әсәйем минең күңелгә башҡорт теленә булған ихтирам тойғоһон һалған. Үҙ сиратымда мин дә балаларҙы ошо ҡағиҙәгә таянып үҫтерҙем. Улар рус мәктәбендә уҡыһалар ҙа, өйҙә тик башҡортса аралаштыҡ, шуға күрә туған телде яҡшы beләләр. Ейәнебеҙ ҙә башҡортса иркен аралаша, башҡортса әкиәттәр уҡырға, башҡортса йырҙар тыңларға ярата. Ағас япраҡ ярһын өсөн уның тамыры һутлы булырға тейеш. Балалары, ейәндәре башҡорт телен ҡәҙерләһен өсөн, тәү сиратта, атайҙың һәм әсәйҙең үҙ телен һанлауы мөһим.

Үҙенең туған телен белмәгәндәрҙе мин бүре ояһында тәрбиәләнгән кешегә оҡшатам. Ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында хайуандар донъяһында үҫкән сабыйҙы кешеләр араһына ҡайтарған хәлдә лә ул йәмғиәттең тулы ҡанлы вәкиле була алмай. Уның аяҡтары бар, ләкин кеше кеүек тура тороп атламай, теле бар - һөйләшмәй, ҡулы бар - яҙмай, йәғни ул тик примитив тормош алып барыу өсөн генә яраҡлашҡан. Туған телен һанламаған, уға битараф булған кеше минә ошондай бахыр йән эйәһен хәтерләтә. Уның тәү ҡарашҡа күркәм булып күренгән донъяһының бер урыны китек, сөнки ул үҙенә йәшәү көсө биреп торған ата-бабалары рухы менән бәйләнеште юғалтҡан. Ә үҙ тарихынан айырылған кеше мәғрур ҡаяташтан ярсылып төшөп, төҫһөҙ генә булып ятҡан ҡырсынташ ише. Шуға күрә, туған телен камил белеү кешегә йәмғиәттә тотҡан урынын ныҡлы һәм ышаныслы итеүсе бер сара ла ул.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# УҠЫТЫУСЫ ҺӨНӘРЕ...

## абруйлы булып ҡала әле



**Бөгөн беҙ киләсәк быуынды тәрбиәләүсе, аң-белем өләшеүсе уҡытыусыларға ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә? Ошо көндәрҙә Өфөнөң Ҡала мәҙәниәт һарайында үткән "Башҡортостан баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы - 2015" XVIII ҡала конкурсы һәм "Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2015" XI конкурстарын йомғаҡлау тантанаһында булған һәр кем был һорауға яуап тапҡандыр, моғайын.**

**(Дауамы 5-се биттә).**

ИҒТИБАР!

## АРЗАН ХАҠҠА ЯҘЫЛЫҒЫҘ!

Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 26 февралдән 7 мартҡа тиклем матбуғатҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә 445 һум 56 тингә, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарына 398 һум 40 тингә (махсус индекс - ДО665) яҙылырға мөмкин. Башҡортостандың бөтә почта бүлексәләрендә лә ун көнлөктөң махсус шарттары менән таныша йәки баҫмаларға яҙыла алаһығыҙ.

Ир-егеттәргә шундай тәҡдимебеҙ бар: 8 Март байрамына әсәйҙәрегеҙгә, апай-һеңлеләрегеҙгә, ҡатындарығыҙға "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып бүләк итегеҙ. Улар өйҙәренә гәзит килгән һайын һеҙҙе иҫкә төшөрөр, рәхмәт уҡыр. Ошондай матур бүләктән мәхрүм итмәгеҙ яҡындарығыҙҙы.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

12+

*✓ Синыфта берәй түңәрәккә йөрөмәгән, йырламаған, бейемәгән, спорт менән шөғөлләнмәгән уҡыусы булһа, унең менән айырым ултырып һөйләшеп, күңеленә ятҡан шөғөл таба инеләр.*



БЫЛ АЙҘА...

# МАРТ "ШАРТ ТА ШОРТ" ТҮГЕЛ,

## март - йомарт!



**"Мартта - шарт та шорт" тип, халыҡ ҡыштың һуңғы тулауын, аҡман-тоҡманды әйткәндер, күрәһең. Ләкин нисек кенә шартылдамаһын - март ҡояшы барыбер үҙенекен итә - ҡыш эңеренә күнеккән күҙҙәрҙе сағылдырып, ялт итеп көлә башлай. Ҡалын ҡар юрғаны көнләп түгел, сәғәтләп йоҡара.**

8 март - Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө менән дә йәмле бит ул март айы.

Был айҙа ла иҫтәлекле көн һәм байрамдар байтаҡ. Мәҫәлән, айҙың тәүге көнө Бөтөн донъя граждандар оборонаһы көнө булараҡ билдәләнәсәк. Бөтөн донъя яҙыусы көнөнөң (3 март) быйылғы Әҙәбиәт йылы менән ауаздаш килеүе байтаҡ әҙәби-мәҙәни сараларға яҡшы башланғыс булыр, моғайын. Халыҡ-ара ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау көнө лә (15) үҙенең көнүҙәклеге менән иғтибарҙы йәлеп итәсәк. Ә Бөтөн донъя һыу ресурстары көнө һуң? Бөгөнгө көндә беҙҙең илдә генә эсәр һыуҙың ҡәҙере тейешле баһаланмайҙыр, ә башҡа илдәр күптән саң һуға: сөсө һыу запастары йылдың-йылы кәмеүгә табан бара...

Ай башындағы әлеге Яҙыусы көнө саралары ай ахырында (24-31) Балалар һәм үҫмерҙәр китабы аҙналығы, шулай уҡ Шиғриәт көнө менән дә дауам итеүе ихтимал. Китап аҙналығын, тәбиғи, уны ижад итеүсе яҙыусылар менән осрашыуҙарһыҙ күҙ алдына килтереүе ҡыйын булыр ине. Бөтөн донъя театр көнө лә (27) йылдың-йылы тулҡынландырғыс тамашалары менән иҫтә ҡалырлыҡ була. Республикабыҙ тормошона ҡағылышлы иҫтәлекле ваҡиғаларға ла бай ғына был ай. Мәҫәлән, 5 мартта БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға тәүге һайлауҙар көнө билдәләнһә (1995), 20 март - Башҡортостандың автономиялы республика булараҡ танылыу алған көнө (1919).

Ай һайын күренекле шәхестәребеҙҙе ихтирамлап иҫкә алыу, абруйлы юбилярҙарҙы ҙурлау ҙа һәйбәт йолаларҙың береһе. 7 март 1-се дәрәжә Ватан һуғышы һәм Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары кавалеры, фронтовик яҙыусыларҙың береһе Мөхәмәт Хәйҙәровтың тыуыуына - 100 йыл, яҙыусы һәм тәржемәсе Ғәле Зөлҡәрнәевтың тыуыуына - 110 йыл тула. 21 мартта иһә тағы бер арҙаҡлы шәхесебеҙ - совет партия һәм дәүләт эшмәкәре, Социалистик Хеҙмәт Геройы Нуриев Зыя Нурый улының тыуыуына - 100 йыл, Социалистик Хеҙмәт Геройы Ғилман Яҡуповтың тыуыуына 90 йыл тула.

Мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренән биология фәндәре докторы, профессор Сәфәрғәле Йәнтүрин, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Вил Кәримов, танылған баянсы-концертмейстер, Башҡортостандың - халыҡ һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Ридик Фәсхетдинов, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фәйзрахман Исмәғилев, БР-ҙың халыҡ артисы Фәтих Дәүләтбаев юбилейҙарын билдәләйәсәк. Дәүләкән район хәкимиәте башлығы Закир Бикбулатовты ла юбилейы менән ҡотлайбыҙ.

Март айының тағы бер йомартлығы хайран итте: был айҙа 9 Советтар Союзы Геройы (һуғыштан иҫән ҡайтһалар ҙа, уларҙың бөтәһе лә мәрхүм инде) һәм 7 Социалистик Хеҙмәт Геройы (шулай уҡ береһе лә иҫән түгел) тыуған!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Башҡорт теленә һөйөүҙе һеҙҙә кем уятты һәм уны балаларығыҙға тапшыра алдығыҙмы?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Гүзәл КИЛДЕҒОЛОВА, Әбйәлил районы Асҡар ауылы:*** Башҡорт теленең бар матурлығын, уны белеүҙең әһәмиәтен һәм үҙеңдең туған телеңдә аралашыуҙың ни тиклем мөһим икәнлеген миңә уҡытыусым - Әнәс Вәли улы аңлатты. 1978 йылда 1-се республика мәктәп-интернатҡа уҡырға килгәндә тик урыҫ телендә генә аралашҡан бала инем. Интернаттағы тәүге йылдарҙа изложениены урыҫ телендә яҙам да, унан башҡортсаға тәржемә итәм, аралашыуҙа ла, туған телемде яҡшы белмәү сәбәпле, башҡортса һүҙҙәрҙе бик әҙ ҡуллана торғайным. Ләкин ваҡыт үтеү менән матур итеп башҡортса һөйләшергә өйрәндем, изложение, иншаларҙы бер хатаһыҙ яҙа башлауға өлгәштем һәм, иң мөһиме, башҡортса фекерләүгә күстем. Интернатҡа бәләкәй генә сағымдан уҡырға килеүем һәм туған телемдә яҡшы итеп аралаша башлауым халҡымдың рухи, мәҙәни, әхлаҡи асылынан алыҫая барған еремдән кире үҙ булмышыма ҡайтарҙы. Быларҙың барыһы ла уҡытыусымдың тырышлығы һәм ныҡышмалылығы арҡаһында тормошҡа ашты. Әнәс Вәли улы туған телдең кешенең шәхес булып формалашыуында ҙур роль уйнауын яҡшы аңлаған һәм һәр уҡыусыһының күңелендә башҡорт теленә ҡарата һөйөү уятыу өсөн бар көсөн һалған мөғәллим ине. Үҙемдең ошо 1-се интернат-мәктәп уҡыусылары араһында булыуым менән бәхетлемен һәм йөрәгемдә уҡытыусыларыма оло рәхмәтемде йөрөтәм. Улар биргән тормош һабағын балаларыма ла бирергә тырыштым. Улар башҡорт телендә иркен аралаша, уны яраталар һәм ҡәҙерләйҙәр.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# ЙӘШТӘРҘЕ ӘРЛӘМӘЙЕК...



**Флорит ҒӘЛӘҮЕВ, философия фәндәре докторы, БДУ профессоры, 1 ранг капитаны:** Бөгөнгө заманда күп ауырлыҡтар йәштәр иңенә төшә. Йәштәр ташып торған энергияһын нимәгә сарыф итергә белмәй, бөтә ерҙә еңеп сығыр өсөн ҡатмарлыҡтар эҙләй, йыш ҡына йырып үтә алмаҫлыҡ проблемаларға юлыға. Шуның өсөн дә беҙ уларҙы һәр яҡлап күтәрмәләп торорға, ауыр саҡтарҙа гел эргәләрендә булырға тейешбеҙ. Юғиһә, ҡайһы бер ата-әсәләр эш, көндәлек проблемаларға күмелеп, балаларының хәлдәрен һорашырға ла, уларҙың нимә менән шөғөлләнеүен, ҡайҙа йөрөүен, көнөн нисек үткәреүен белешергә лә ваҡыт тапмай. Беҙ уларҙың һәр яһаған аҙымында ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торһаҡ, ныҡлы белем бирһәк, перспективалар һәм эш урындары ҡалдырһаҡ, уларға тормош юлында еңелерәк булыр ине.

Йәштәр тураһында уйланғанда, уларҙың кире йоғонтоға бирелеп, мәктәп йылдарынан уҡ тәмәке тартырға, эсергә өйрәнеүен күреп борсолам. Беҙҙең быуынды иҫкә төшөрәм дә, 10-сы синыфты тамамлаған осорҙа арабыҙҙан бер егет тә тәмәке тартмай ине, тип ғорурланып ҡуям. Хәҙер малайҙар ғына түгел, хатта ҡыҙҙар ҙа тәмәкене ҡулынан төшөрмәй. Тәмәкенән һуң спайс, наркотик ҡуллана башлайҙар. Бынан бер нисә ай элек кенә Башҡортостанда һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында спайс ҡулланыусы йәштәр һәләк булды. Оло быуын кешеләре ундай нәмәләрҙе бер тапҡыр ҙа ҡулына алып ҡарамағас, ни өсөн йәштәр быңдай кире йоғонтоға бирелеүен аңлап та етмәй. Минеңсә, был уларҙың буш ваҡыттарын нисек үткәрергә белмәүенән килә. Беҙҙә министрлыҡтарҙа йәштәр проблемаһы менән шөғөлләнгән, уларҙы тупларға тырышҡан төрлө ойошмалар бар ул барлыҡҡа, әммә етерлек кимәлдә эш алып барылмай. Үҙемдең миҫалдан сығып әйтәм, Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатын 1966 йылда тамамланым, шул осорҙа синыфта берәй түңәрәккә йөрөмәгән, йырламаған, бейемәгән, спорт менән шөғөлләнмәгән уҡыусы булһа, уның менән айырым ултырып һөйләшеп, күңеленә ятҡан шөғөл таба инеләр. Сөнки буш йөрөгән кеше нимә эшләргә, энергияһын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, берәй эш боҙоуы ла ихтимал. Шуның өсөн, йәштәрҙең нимә менән шөғөлләнеүенә, ваҡытын нимәгә сарыф итеүенә иғтибар бүлергә кәрәк. Йәш быуынды аңһыҙ, белдекһеҙ, насар тип әрләргә ашыҡмайыҡ, хәлде яҡшыртыу өсөн аныҡ эштәр эшләргә тырышайыҡ.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓20 февралдә "Салауат Юлаев" хоккей клубы" автономлы коммерцияға ҡарамаған идараһы ултырышында клубтың Уставына ярашлы идараның яңы составы билдәләнде. Уға биш кеше инде. Илшат Ғимаҙрисламов, Рөстәм Ишәлин, Евгений Лохов, Йосоп Мирсәйетов уның составынан сығарылды. Хоккей клубы идараһының яңы составына Сергей Молчанов, Сергей Михалев, Михаил Ставский, Дмитрий Ганабин индерелде. Шуның менән бергә Юрий Пустовгаров клуб идараһында үҙ урынын һаҡлап ҡалды. Шул уҡ көндө Континенталь хоккей лигаһы етәкселегенә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең "Салауат Юлаев" клубын финанслау тураһында гарантияһы ебәрелде. Уны ҡабул итеү хаҡында яуап килгән.

✓Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте йортонда "Рәсәйҙең иң төҙөк ҡала (ауыл) биләмәһе" бөтә Рәсәй конкурсы еңеүселәрен иғлан иттеләр. Октябрьский ҡалаһы икенсе категорияла (100 мең һәм унан күберәк кеше йәшәгән ҡала биләмәләре, ҡала округтары) еңеп сыҡты, Стәрлетамаҡ ошо уҡ категорияла өсөнсө урын алды. Учалы ҡалаһы өсөнсө категорияла (100 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡала биләмәләре, ҡала округтары) өсөнсө урын яуланы.

✓"Росреестр"ҙың төбәк идаралығы билдәләүенсә, 2014 йылда Башҡортостанда ипотека кредиттары алыусылар һаны һәм граждандарҙың өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыуҙары артыуы теркәлгән. 2014 йылда - 71 меңдән ашыу, ә 2013 йылда 67470 ипотека кредиттары теркәлгән. Үсеш биш процент тәшкил итә. Килешеүҙәр буйынса өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыу 19,3 процентҡа артҡан. Ипотека буйынса ғинуар күрһәткестәре уҙған йылдыҡы менән тап килә һәм 1032 килешеү тәшкил итә.

✓Иглин районы Советы хакимиәт башлығы Рафиҡ Мусиндың вәкәләттәрен туҡтатыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Ул үҙ теләге буйынса отставкаға китте. Хакимиәт башлығы вәкәләттәрен ваҡытынан алда туҡтатыуға бәйле, район башлығы вазифаһын башҡарыу ваҡытлыса Вил Хафизовҡа йөкмәтелде. Рафиҡ Мусин республика колледждарының береһенең директоры вазифаһына кандидат булараҡ ҡарала.

*ӨС БЫУЫН ФЕКЕРЕ*

# ЗАМАН АУЫР, ТИҘӘР...

**"Заман ауыр, тиҙәр, һеҙ быныҡ менән килешәһегеҙме?" тигән һорау менән өс быуын вәкиленә мөрәжәғәт иттек.**

**Рифат ӘХМӘҘИЕВ, пенсионер:** Ғүмеремдең күп өлөшө совет заманында үтте, коммунизм төҙөүҙең, дөрөҫөрәге, төҙөп маташыуҙың шаһиты, ҡатнашыусыһы булдым. Бала сағыбыҙ, йәшлегебеҙ хыялдары селпәрәмә килеп, икенсе заманда йәшәй башлауыбыҙға ла ике тиҫтә ярым йылдан ашыу ваҡыт үтеп китте. Эйе, тормош бер төҫлө генә түгел, шатландырған, көйөндөргән, ҡурҡыуға һалған мәлдәр ҙә булды, шуға күрә лә сағыштырырға, тәнҡит күҙлегенән ҡарарға минең хоҡуғым бар, тип уйлайым. Бөгөн нимә генә тип һөйләмәһендәр, иллә мәгәр миндә совет осоронан тик яҡшы иҫтәлектәр генә ҡалды. Халыҡ маҡсатлы ине, үҙе генә түгел, бар илебеҙ, халҡыбыҙ яҡшы йәшәһен, тип тырышты. Пионерҙар, комсомолдар шул замандың яҡты иҫтәлеге булып ҡалды. Сит илдәргә, башҡа континенттарға йөрөргә мөмкинлек булмаһа ла, эш хаҡыбыҙ үҙ дәүләтебеҙ буйлап иркенләп йөрөргә етә ине. Бөгөн эгоизм көсәйҙе, аҡса культы ҡалҡып сыҡты, күпселек халыҡ ни эшләргә, нисек йәшәргә белмәй ҡаңғыра, ә икенселәр ошо ҡаңғырыҡтан бик оҫта файҙалана. Мөмкинлектәр элеккегә ҡарағанда күберәк, әлбиттә, әммә күп осраҡта аҡса менән билдәләнгән ул мөмкинлектәрҙе ҡулға төшөрөү һәр кешенең дә көсөнән килмәй. Халыҡ ҡатламдарға бүленә, ул ҡатламдар араһында тигеҙһеҙлек ҙурая бара. Аңлап, төшөнөп етмәгән нәмәләр байтаҡ инде ул. Шулай булһа ла, һәр ваҡыттағыса, яҡшыға юрап, балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ өсөн яҡшы тормошҡа өмөт итеп йәшәргә кәрәк, тип уйлайым.

**Айҙар ЮЛДАШБАЕВ, эшҡыуар:** Эйе, заман ауыр, тип, үҙенде тынысландырырға ла, ошоға күнеп, башты эйеп, моңһоҙланып ултырырға һәм бер нәмә лә эшләмәҫкә лә мөмкин. Ә был ваҡытта бар тормошоң йыныйдан йылға шикелле ағып үтәсәк һәм һин үткән йылдарыңды ҡабаттан бер ҡасан да ҡайтара алмаясаҡһың. Бер ваҡытта ла еңел булмаған, һәр замандың кискен мәсьәләләре, проблемалары кешеләр иңенә төшөп торған, кемдәрҙелер батырған, икенселәрҙе нығытҡан. Дөрөҫөн әйткәндә, һәр ҡыйынлыҡ артында яңы мөмкинлектәр, яңы офоҡтар ята ул. Ҡурҡаҡ кеше генә зарланыу юлын һайлаясаҡ. Көслө кешеләр заманына, ҡыйынлыҡтарға саҡырыу ташлап, үҙенә яуаплылыҡ алып үҫеү, камиллашыу, уңышҡа өлгәшеү юлдарын эҙләйәсәк. Үҙенең ғүмерен бер нисә йылға алдан күҙалларға тырышҡан кеше генә нимәгәләр өлгәшә аласаҡ. Замандың ауырлығы уның өсөн яңы саҡырыу, яңы әтәргес, яңы мөмкинлектәр генә буласаҡ.

**Дамир ИЛЬЯСОВ, студент :** Беҙ ошо заманда тыуҙыҡ, үҫтек. Ниндәйҙер икенсе дәүләт ҡоролошо, икенсе замандар булғаны хаҡында ишетһәк тә, уны күрмәнек. Ололар һөйләгән совет осоро тотороҡлогоноң, “коммунизм төҙөүҙең” дә шаһиты булманыҡ. Эйе, 90-сы йылдарҙағы емергес хәл әҙ генә булһа ла хәтеребеҙҙә тороп ҡалған. Шуға күрә лә, ата-әсәйҙәребеҙҙең дә, башҡа кешеләрҙең дә, ғөмүмән, дәүләттең дә иҡтисади хәленең яҡшырыуын күреп үҫтек. Беҙҙең йәштә заман ауыр тип әйтеү ниндәйҙер мәсхәрә кеүек тойола. Был үҙендә көбөргә һалыу менән тиң, тип тә әйтер инем. Әгәр йәштәр, заман ауыр, тип ҡул ҡаушырып ултырһа, артабан нимә булаҫаҡ? Дөрөҫ, һуңғы ваҡытта иҡтисади йәһәттән дә, сәйәси яҡтан ла ҡыйынлыҡтарҙы күҙәтәбеҙ. Иҡтисади көрсөк елдәрен тоймаҫтай, һуғыш ҡурҡынысының ҡабаттан ҡалҡыуын, төрлө дәрәжәләге власть кешеләренең башбаштаҡлығын күрмәҫлек һуҡырҙар түгелбеҙ. Шулай ҙа былдай заманда алһыу күҙлектәр аша донъяға баҡҡан оптимистарҙың, йәки тоннелдең аҙағында яҡтылыҡ күрмәгән пессимистарҙың йөгонтоһона бирелмәйсә, аң айыҡлығын һаҡлап ҡалыусылар рәтендә ҡалғы килә. Ҡыйынлыҡтар бар, улар күп, әммә донъябыҙ ҡотҡарып булмаҫлыҡ юғалтыуҙар һыҙығында түгел икәнен аңларға кәрәк. Бәлки, тап беҙҙең быуынға ниндәйҙер ҙур һынауҙар төшөр һәм беҙ яңы замандың архитекторҙарына әйләнербеҙ. Ошо юҫыҡта фекер йөрөтөргә һәм шәхси яуаплылыҡты иңгә йөкмәргә әҙер булырға кәрәк, тип уйлайым.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ яҙып алды.**

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА...*

## БАШҠОРТ БАТЫРЫ...

### тағы майҙан тота



**Билдәле башҡорт спортсыһы, "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" исемен яулаған Эльбрус Ниғмәтуллин 2 мартта сираттағы рекорд ҡуйырға әҙерләнә. Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 70 йыл тулыу айҡанлы ул ауырлығы 700 килограмм тартҡан дөйәне күтәрергә ниәтләй.**

Рекорд ҡуйыу урыны итеп Силәбенең йәйәүлеләр урамы һайланған. Бәһлеүән дөйәне бронзанан эшләнгән "Башҡорт малайы һәм дөйә" скульптура композицияһы янында күтәрәсәк. Был осраҡлы түгел - ҡаланың гербында төшөрөлгән дөйә Силәбенең символы булып тора. Тарихсыларҙың мәғлүмәттәре буйынса, Көньяҡ Урал аша Бөйөк ебәк юлы үткән. Дөйәнең исеме - Вася.

– Беҙ Вася менән таныштыҡ та инде. Ул үҙен бик яҡшы тота, - тип һөйләне Эльбрус Ниғмәтуллин.

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# СЕБЕР КИТӘ ИРҘӘР!

**"Киске Өфө" гәзитенең 7 февраль һанында Лариса Абдуллинаның "Өфө аэропортында" тигән шиғырын уҡып сыҡҡас, 2-3 көн эргәмдә генә тотоп, ҡат-ҡат уҡыным, хатта күҙҙәрем йәшкәҙәне. Түҙмәй, фекерҙәремде башҡалар менән дә уртаҡлашырға булдым.**

Тормош иптәшем әрменән ике йыл хеҙмәт итеп ҡайтҡас: "Ауылдан егеттәр БАМ-ға китә, әйҙә, кәләш, беҙ ҙә барып эшләп килəйек", - тине һәм беҙ был хаҡта атай-әсәйҙәргә кәңәш иттек. Атайым - һуғыш ветераны, әсәйем яғынан олатай-бабайҙарым репрессияға дусар ителеп, Воркута, Печора лагерҙарында һаулыҡтарын ҡаҡшатып, тыуған ауылға ҡайтып, һуңғы һулыштарына тиклем ауыл, ер-һыу тип йәшәнеләр һәм баҡыйлыҡҡа күстеләр. "Элек Әбей батша Себергә һөргөнгә ебәргән, ә һеҙ үҙегеҙ теләп китәһегеҙме ни?" - тине атайым беҙҙең ниәткә ҡаршы икәнен белдереп. Әсәйем, оло апайым: "Ҡуй-ҡуй, уларҙың шунда ҡалыр, мәрйәнән кәләш алып бөтөрҙәр, ана, мал тотоғоҙ, теләһәң ауылда ла бесәнлектәр күп, йәшәргә була", - тип, иркен йәшәгән күрше-күләнде, апай-ағайҙарҙы миҫалға килтереп, беҙҙе был уйыбыҙҙан кире күндерҙеләр. Хәҙер инде хаҡлы ялдағы ветеран уҡытыусымын. Ҡайны саҡ, Себер яҡтарында эшләп ҡайтҡан ауылдаштарға ҡарап, осон-осҡа ялғап йәшәүебеҙгә йәнем үртәлеп киткәндә, "Нишләп атай-әсәйҙе тыңлағаныбыҙҙыр инде..." тип көйөп тә китәм.

Икенсе яҡтан уйлайым да, шөкөр итәм: улдарым Өфөлә эшләй, шунда төпләнделәр, бынамын тигән башҡорт ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарым менән аралашып, аңлашып, ҡәҙер-хөрмәт итеп, мөмкинлек сыҡҡан һайын осрашып торабыҙ; мосолман килендәрем, ҡәйнәм-ҡайным, тип өҙөлөп тора. Ейән-ейәнсәрҙәребеҙ Айҙар, Айтуған, Зөлхизә исемле. Балаларҙың тормошта үҙ урындарын табып, матур итеп йәшәүе - үҙе ҡыуаныс. Ҡасандыр Себергә киткән яҡташтарым үҙҙәре тыуған яҡҡа ҡайтып төпләнһә лә, балалары Себер тарафтарында ҡалды, күбеһенең тормош иптәштәре беҙҙең милләттән түгел, ә ҡайһылары һаман өйләнмәгән.

Себерҙә эшләгән ир-егеттәргә лә еңел түгел: ғаиләһен, балаларын 2-3 ай күрмәй, йылы өй ашын ашамай, төрлө сирҙәргә юлығып, күбеһе инсульт, инфаркт кисереп аҡса эшләп йөрөгән булалар. Юл һәләкәттәре, башҡа бәлә-ҡазаһы күпме ир-егетте ваҡытынан алда теге донъяға алып китә. Себерҙә эшләү - батырлыҡ, тип әйтер инем мин.

Тик өйҙә ҡалған ҡатындары шуны аңлап, барҙың ҡәҙерен белеп, донъяһының, ирҙәренең бәсен төшөрмәй, сабыр ғына, ипле-тотанаҡлы ғына, балаларын ҡурсалап, усаҡ йылыһын һүндермәй генә донъя көтһөн ине. Быны ни өсөн яҙам? Сөнки килешмәйем! Ирҙәре, аҡса эшләйем, ғаиләмде ҡарайым, тип, вахта ысулы менән Себерҙә яфаланып йөрөй, ә ҡатындарының "Брат из Севера приехал", тип, ғаилә ҡотон ебәреп, ире ыҙалап тапҡан аҡсаны елгә осороп йөрөүе менән килешмәйем. Ғөмүмән, ирҙәрҙең мал табыу, бәхетле булыу юлдарын үҙ тыуған ерендә эҙләмәй, сит тарафтарҙа йөрөп ятыуы менән дә һис килешеп булмай. Ауылдар тарҡала, ил тарҡала, ғүмер буйы беҙҙә оҙата килгән традициялар тарҡала. Дәүләт ни ҡарай? Лариса Абдуллина шиғырындағыса, "Их, ҡулындан килеп, һәр береһен, эшле итеп алып ҡайтаһы..." тип көйөнөргә генә ҡала инде.

**Нәйрә ИШМӨХӘМӘТОВА, Учалы районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфө хакимиәтенең Йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты һәм Йәштәрҙең мәшғүллегенә ярҙам итеү үҙәге башлап ебәргән "Хыялымдағы һөнәр" конкурсы Әҙәбиәт йылына арнала. Конкурс шарттары буйынса 1-8 класс уҡыусыларына шиғыр, ә өлкән класс уҡыусыларына "Хыялымдағы һөнәр" темаһына эссе яҙырға тәҡдим ителә. Эштәр 24 апрелгә тиклем ҡабул ителә: cszm@mail.ru (хаттың темаһын "Хыялымдағы һөнәр" тип күрһәтергә). Ҡағыҙ вариантын түбәндәге адрес буйынса ебәрергә кәрәк: Октябрь проспекты, 118, 29-сы бүлмә. Белешмә өсөн телефон: (347) 279-06-56, 279-06-35.

✓Башҡортостанда йәшәүселәрҙең күбеһе торлаҡты бушлай хосусилаштырыу хоҡуғы менән файҙаланған. Был хаҡта "Росреестр"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығында белдерҙеләр. Бөгөнгә көнгә республикала йәшәүсе 1 миллион 158 мең кеше торлағын хосусилаштырған. Ведомствола 2016 йылдың 1 мартына тиклем тағы 10-15 мең кеше бушлай хосусилаштырыу менән файҙаланасаҡ, тип күҙаллайҙар.Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Дәүләт Думаһы 2016 йылдың 1 мартына тиклем бушлай хосусилаштырыу ваҡытын оҙайтҡан закон проектын һуңғы уҡыуҙа ҡабул итте.

✓Ете авиакомпания Өфөнән Сочиға, Симферополгә, Анапаға һәм Краснодарға осорға планлаштыра, тип хәбәр итте "Өфө" аэропортының матбуғат хеҙмәте. 2015 йылда пассажир ташыусылар Рәсәй курорттарының популярлығы артыуын күҙаллай һәм илдең көньяҡ төбәктәренә осоштар йышлығын арттыра. "Таймыр" һәм "Оренбургские авиалинии" компаниялары "Өфө" аэропортынан Анапаға аҙнаһына ике тапҡыр рейс башҡарырға ниәтләй. Краснодарға "Ямал" авиакомпанияһы самолеты менән аҙнаһына бер тапҡыр осорға мөмкин буласаҡ.

✓Өсөнсө саҡырылыш Мишкә районы Советы Рөстәм Мусинды контракт буйынса район хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләне. Рөстәм Мусин 1965 йылдың 10 авгусында Иштебай ауылында тыуған. Башҡортостан ауыл хужалығы институтын һәм Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған.

**“Башинформ”дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ЙӘШТӘР СОВЕТЫ ҮТӘСӘК

**Быйыл июлдә ШОС илдәре Йәштәр советының һигеҙенсе ултырышы Өфөлә уҙасаҡ. Әлеге ваҡытта ошо форумға әҙерлек бара.**

Башҡортостанға Ҡытай, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Ҡырғыҙстан дәүләттәренең йәштәр вәкилдәре киләсәк (Советҡа Үзбәкстан инмәгән). Рәсәй делегацияһын Денис Кравченко етәкләйәсәк. ШОС илдәренең Йәштәр советы Владимир Путин инициативаһы менән ойошторола. Был идеяны Рәсәй лидеры 2006 йылда ШОС илдәре етәкселәренең Шанхайҙағы осрашыуы барышында бирә. Советтың ойоштороусылары булып Ҡаҙағстан йәштәре конгресы, "НурОтан" халыҡ-демократик партияһының "ЖасОтан" йәштәр бүлеге, Бөтөн Ҡытай Йәштәре федерацияһы, Ҡырғыҙстандың Йәштәр ижтимағи советы, "Рәсәй Йәштәр берлеге" Бөтөн Рәсәй ижтимағи ойошмаһы, Рәсәйҙең Йәштәр йәмәғәт палатаһы, Тажикстан Йәштәр берлеге тора. Һуңынан ойошманың ойоштороу документтарына, Шанхай хеҙмәттәшлеге ойошмаһының Йәштәр советы тураһында Положение һәм Декларацияға ҡул ҡуйыла.

"Бөгөн ШОС илдәре Йәштәр советының төп бурысы - төрлө өлкәләрҙә халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә ярҙам, - ти Рәсәй делегацияһының Башҡортостандан вәкиле, Өфө ҡала хакимиәтенең Йәштәр эштәре буйынса комитеты рәйесе Урал Килсенбаев. - Өфөлә беҙ ШОС илдәренең Йәш журналистары һәм блогерҙары форумын, Йәштәр инновацион форумын үткәрәсәк. Бындай кимәлдәге форумдар уҙғарыу тәжрибәбеҙ бар. Йәштәрҙең дөйөм маҡсаты булыуы һәм ошо йүнәлештә белемдәре, тәжрибәләре менән бүлешеүе мөһим".

## ПОЧТА ХЕҘМӘТЕ КӘРӘК ӘЛЕ...

**Рәсәй Почтаһы Башҡортостан бүлексәһенең йыл йомғаҡтарына арналған киңәйтелгән ултырышында билдәләнеүенсә, былтыр оператор төбәк халҡына ике миллиондан ашыу посылка илткән. Шуларҙың бер миллионы ҙур күләмдә булһа, ҡалғаны - ике килограмға тиклемге тауар.**

2013 йыл менән сағыштырғанда, бәләкәй посылкалар күләме 2,7 тапҡырға арткан. Бындай үҫеш интернет-сауҙа үҫешеүенә бәйле. Шулай уҡ почта бүлексәләре аша ебәрелгәндәре лә 2013 йыл менән сағыштырғанда 34 процентҡа арткан. Бынан тыш, уҙған йыл почта хеҙмәткәрҙәре 48 миллион ябай хат эшкәрткән. Заказлы һәм ниндәйҙер ҡиммәткә эйә хаттар һаны 42 миллионға етә. Бында ла һиҙелерлек үҫеш бар. Дөйөм алғанда, филиалдың йыллыҡ килеме 3,5 миллиард һум тәшкил итә. Килемдең 90 проценты самаһы почта-финанс хеҙмәте күрһәтеүҙән алынған. Хаттар һәм посылкалар ҡабул итеүҙән тыш, Башҡортостан почта бүлексәләрендә 2 миллион һумлыҡ аҡса күсереүгә ҡабул ителгән һәм түләнгән. Коммуналь һәм башҡа төрлө түләүҙәр һаны 32 миллион данаға еткән.

БАЛАЛАР ДОНЪЯҺЫ

# ӘҘӘБИӘТКӘ ЫЛЫҠТЫРЫУСЫ САРА

**Баш ҡаланың З.Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһында Зәйнәб Биишеваның тормош һәм ижад юлына арналған ижади проекттарҙың II республика конкурсы үтте.**

Был конкурс Башҡортостан Республикаһы ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты һәм БР Мәғариф министрлығы тарафынан ойошторолдо. Зәйнәб Биишеваның шиғырҙары, поэмалары буйынса биш секция эшләне, иң яҡшы тип табылған 90 ижади проект тикшерелде. Ойоштороусылар әйтеүенсә, эштәр былтырғыға ҡарағанда күберәк тәҡдим ителгән. "Йыл һайын конкурстың темаһы үҙгәреп тора, былтыр Зәйнәб Биишеваның биографияһы буйынса ижади проекттар эшләргә, тигән талап ҡуйылғайны. Мәктәп уҡыусылары әҙибәнең бала һәм үҫмер сағын яҡтыртты. Быйыл конкурс халыҡ яҙыусыһының тормош һәм ижад юлына, уның поэзия өлкәһендәге уңыштарына бағышлана", - тине З.Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы директоры Илшат Биҡҡолов конкурсты тантаналы асыу барышында. Конкурсанттар биш секцияға бүленеп үҙ проекттары менән таныштырған арала, жюри рәйесе, БДУ профессоры Зәйтүнә Шәрипова менән әңгәмәләштек.

- Олуғ шәхестәребеҙҙең исемен йөрөткән һәр уҡыу йортонда ошондай саралар үткәрелеп тороуы тик хуплауға лайыҡ. Был әҙиптәребеҙҙе барлау, уларҙың ижадтарына баһа биреү генә түгел, балаларҙы әҙәби әҫәргә, ижадҡа ылыҡтырыу йәһәтенән дә әһәмиәтле. Башҡорт теленең киләсәге тулыһынса ошо кескәй быуын ҡулында, уларҙың туған әҙәбиәтенә ҡарата булған ҡыҙыҡһыныуына, һөйөүенә бәйле, - тине Зәйтүнә Яхия ҡыҙы.

Әйткәндәй, өс секцияла Зәйнәб Биишеваның шиғырҙарына бағышланған башҡортса проекттар күрһәтелде, бер секция рус телендә эшләне, берәһе - әҙибәнең поэмаларын тикшерҙе. Конкурс һөҙөмтәләренә килгәндә, бөтәһе 30 мәктәп уҡыусыһы еңеүсе тип табылды, бөтә ҡатнашыусылар ҙа иҫтәлекле бүләктәр һәм маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләнде. Ә иң юғары баһаға биш уҡыусы лайыҡ булды: Альбина Нурыева (48-се Башҡорт лицейы), Әлфинә Мәмбәтова (Йылайыр районы), Нина Орлова (64-се гимназия), Ләйсән Исхаҡова, Арсений Епифанов (Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты).

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

# ТАРИХЫҢДЫ БЕЛӘҺЕҢ ИКӘН...



**Республика иҡтисад лицей-интернаты нигеҙендә "Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте" һәм "Тормош һабаҡтары" предметтары буйынса мәктәп уҡыусыларының республика олимпиадаһы үтте.**

Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте предметы буйынса республиканың төрлө район һәм ҡалаларынан 53 - һигеҙенсе синыф уҡыусыһы, 49 туғыҙынсы синыф уҡыусыһы ҡатнашты. Ойоштороусылар әйтеүенсә, йыл да үткәрелгән был олимпиадаға балалар һәр ваҡыт яҡшы әҙерлек менән килә. Йәш быуын ата-бабалар тарихын өйрәнергә ашҡынып бармай, йыш ҡына хатта бөйөк тарихи шәхестәребеҙҙе белмәй, тип зарланһаҡ та, ярыш һөҙөмтәләре бик ҡыҙыҡлы булды. Һигеҙенсе синыф уҡыусылары араһынан Өфө ҡалаһының "Содружество" 106-сы лицейы уҡыусыһы Элина Сөнәғәтова төп еңеүсе тип билдәләнде. Ә туғыҙынсы синыф уҡыусыларынан Бәләбәй ҡалаһының 17-се урта белем биреү мәктәбенән Виктория Филиппова Башҡортостандың тарихын һәм мәҙәниәтен иң яҡшы белеүсе уҡыусы булып сыҡты. Бер төркөм балалар илебеҙҙең тарихына ҡағылышлы һорауҙарҙың яуабын асыҡлағансы, икенсе төркөм "Тормош һабаҡтары" предметы буйынса олимпиада эштәрен башҡарҙы. Әйткәндәй, был йүнәлеш буйынса Сибай ҡалаһының "Ирәндек" лицейынан һигеҙенсе синыф уҡыусыһы Ләйсән Ғибаҙуллинаға һәм Учалы районы Науруҙ ауылы урта белем биреү мәктәбенең туғыҙынсы синыф уҡыусыһы Әлфиә Ҡаһармановаға етеүсе булманы.

Иҫтәлекле бүләктәр һәм маҡтау ҡағыҙҙары менән бергә уҡыусылар был олимпиаданан яҡшы тәьҫораттар, ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр алып ҡайтты. Ни өсөн тигәндә, уларға Республика иҡтисад лицей-интернаты уҡыусылары төшөргән "Ҡамыр Батыр әкиәте" мультипликацион фильмын һәм 3D-форматындағы яңы йыл киноһын беренсе булып күреү бәхете тәтене. "Ҡамыр Батыр әкиәте" мультфильмы унынсы синыф уҡыусылары Мәрйәм Юнысбаева һәм Эльвина Шәғәлинаның һүрәттәре буйынса эшләнде. Был 5 минутлыҡ әкиәткә ҡыҙҙар 2200 һүрәт төшөрҙө. Республика иҡтисад лицей интернатында уҡыусыларҙы мультипликацион фильмдар эшләү оҫталығына өйрәтеү өсөн махсус түңәрәк ойошторолдо. Балалар менән "Дисней" мультфильмдары, "Маша һәм айыу" кеүек үҙебеҙҙең башҡорт әкиәттәре нигеҙендә төшөрөлгән проекттарҙы сығарырға ниәтләйбеҙ", - ти уҡыу йортонда информатика уҡытыусыһы Әмир Ғәлекәйев.

Әйткәндәй, Республика иҡтисад лицей-интернаты уҡыусылары роботтар, компьютер уйындары, мультипликацион фильмдар эшләү, теүәл фәндәрҙә өйрәнеүҙән тыш, "Лицей гәзите" тип аталған үҙҙәренең баҫмаһын да сығара. Уҡыу йортоноң директоры Айгөл Хәбибуллина бында баланың төрлө һәләттәрен үҫтереү, һәр яҡлап камиллаштырыу өсөн бөтә шарттар булыуын билдәләй.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2015 йылда мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренең Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранттарына дәғүә итеүгә конкурс еңеүселәре билдәләнде. Рәсми документҡа ярашлы, 90 мең һум күләмендәге матди ярҙам 25 мәҙәниәт эшмәкәренең проекттарын тормошҡа ашырыуға йүнәлтеләсәк. Грант алыусылар араһында һуҡырҙарға сәнғәт әҫәрҙәренә виртуаль инеүҙе тәьмин итеү буйынса проект, Шәйехзада Бабичтың виртуаль музейы, 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына арналған интерактив экспозиция, "Башҡорт шәле" республика фестивале, "Башҡорт аты" фестивале, Йәш композиторҙарҙың халыҡ-ара форумы бар.

✓Өфөлә БРИКС саммитында ошо ойошмаға ингән илдәр үҫеше банкы рәйесе һәм уның урынбаҫары кандидатураһы тураһында ҡарар ҡабул ителәсәк. Федерация Советы БРИКС илдәре үҫеше банкын булдырыу буйынса килешеүҙе раҫланы. Ошо туралағы килешеүгә 2014 йылдың июнендә Бразилияның Форталеза ҡалаһында ҡул ҡуйылды. Ул БРИКС дәүләттәрендә һәм үҫешеүсе илдәрҙә инфраструктура проекттарын финанслау өсөн булдырыла.

✓Мартта Өфөнөң Эшҡыуарҙар союзы бушлай консультациялар ойоштора. 3 мартта юридик компания директоры Наталья Төхвәтуллина консультация уҙғара. 17 мартта "Респект" Хоҡуҡ компанияһының "Ҡыҙыу линия" хеҙмәте консультанты Ирина Ханнанова лекция уҡый. 31 мартта Өфө хакимиәтенең Халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү буйынса идаралыҡтың ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса бүлек етәксеһе Зифа Фазлиәхмәтова эшҡыуарҙарға консультация бирә. Консультациялар СССР-ҙың 50 йыллығы урамы, 84/1 адресы буйынса ойошторола. Ҡатнашыу өсөн алдан яҙылырға кәрәк. Телефон: 241-47-44.

✓"ВДНХ-Экспо" комплексында Мәғариф форумын һәм XV "Мәғариф. Фән. Карьера" махсуслаштырылған күргәҙмәһен асыу тантанаһы үтте. Күргәҙмә эшендә Рәсәйҙең 12 төбәгенән 135-тән ашыу экспонент ҡатнашты. Килеүселәр Башҡортостан, Екатеринбург, Ҡазан, Мәскәү, Магнитогорск, Санкт-Петербург, Һамар, Ырымбур һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренең юғары һәм урта махсус уҡыу йорттары менән таныша алды.

*АФАРИН!*

# УҠЫТЫУСЫ ҺӨНӘРЕ...

## абруйлы булып ҡала әле

**(Башы 1-се биттә).**

Заманса технологиялар, техника үҫешкән заманда уҡытыусылар алдына ҡуйылған талаптар ысынлап та арта бара. Бәләкәйҙән компьютерҙы яҡшы белеп үҫкән балаларға китап, ҡағыҙға төшөрөлгән һүрәт күрһәтеп, таҡтаға аҡбур менән яҙып ҡына дәрес биреп ҡыҙыҡһындырыу мөмкин түгел. Кемдер быны уҡытыусы эшенә өҫтәмә ауырлыҡтар килтерә, тип һанай, әммә ысын мәғәнәһендә уҡытыусылыҡ эшенә мөкиббән китеп эшләүселәргә ошо талаптар яңы мөмкинлектәргә ишек аса ла инде. Әлеге конкурстарҙа ҡатнашыусы педагогтар әйтеүенсә, компьютер һәм интернет селтәре ярҙамында уҡыусыларға сифатлы белем биреү, дәрес темаһы менән ҡыҙыҡһындырыу күпкә еңеләйә. Быйылғы конкурста һәр уҡытыусы үҙенең эш тәжрибәһендә ҡулланылған инновацион проекттары менән уртаҡлашты, оҫталыҡ дәрестәре күрһәтте.

- Балаларға 23 йыл белем бирәм, ошо арауыҡ эсендә үҙемде төрлө конкурстарҙа ла һынап ҡарағаным булды, әммә был ярышта сығыш яһау минең өсөн ҙур мәртәбә. Һөнәри яҡтан үҙемде күрһәтеүҙән тыш, алдынғы ҡарашлы, юғары оҫталыҡтары, тәжрибәләре булған коллегаларымдың эшен күреү ҙә бик файҙалы булды. Инновацион эш тәжрибәһе ваҡытында мин үҙемдең бер-нисә йыл дауамында әҙерләгән проектымды - болот технологияһына нигеҙләнеп төҙөлгән дәрес пландарымды жюри ҡарамағына сығарҙым. Был технологияның өҫтөнлөгө шунда - ул бер-нисә мәктәп уҡыусыларын берләштереп дәрес үткәреү мөмкинлеге бирә. Хатта уҡыусы дәрескә килә алмаған осраҡта, ул ауырыйымы йәки берәй ҡайҙа ял итергә киткәнме - интернет селтәре булған осраҡта, системаға инеп, синыфташтары менән бер үк ваҡытта дәрес материалын үҙләштерә ала. Уҡытыусы өсөн дә уңайлы яҡтары күп, дәрескә әҙерләнеү, балаларға аңлатыу процесын еңеләйтә. Замана балаларын барыбер ҙә примитив рәүештә, китаптан күсертеп яҙҙырып, күнегеүҙәр эшләтеп кенә предмет менән ҡыҙыҡһындырып булмай, мотлаҡ ошондай алдынғы технологияларҙы үҙләштерергә кәрәк. Бигерәк тә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен ҡыҙыҡлы итеп ойоштороу нисек мөһим булыуын барыбыҙ ҙа аңлайбыҙ, тимәк, алдынғы ҡараш талап ителә, - тип һөйләне "Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2015" конкурсының абсолют еңеүсеһе М.Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы Айгөл Игелекова. Интернет селтәре һәм компьютер зыян килтереүсе генә түгел, эш өсөн файҙалы, кәрәкле сығанаҡ булыуын һәр педагог юғары баһаланы. Шулай ҙа конкурсанттар өсөн иң ҡыҙыҡлы этап - түңәрәк өҫтәлдә фекер алышыу өлөшө булды. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ун һорауға күмәкләп яуап эҙләне, уҡытыусылыҡ эшенең иң актуаль мәсьәләләренән алып, рухи тәрбиә, милли үҙаң тураһында ла фекер алышты. Ойоштороусылар әйтеүенсә, конкурстың был этабына быйыл тағы бер яңылыҡ индерелгән - педагогтар менән бер рәттә ата-әсәләр ҙә түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашҡан. Эш һөҙөмтәле, әңгәмә ҡыҙыҡлы булды, тип баһаланы һәр конкурсант.

Конкурстарҙы ябыу тантанаһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов конкурсанттарға артабан республика кимәлендәге ярышта уңышлы сығыш яһауҙарын теләне, был конкурсҡа индерелгән яңы талаптарҙың әһәмиәте тураһында ла әйтеп үтте.

- Быйылғы конкурста бөтәһе 55 педагог ҡатнашты, бөтәһе лә юғары һөнәри маһирлыҡ күрһәтә алды. Мәғариф өлкәһендәге актуаль һорауҙар буйынса фекер алышыуҙа ата-әсәләрҙе йәлеп итеү, милли әҙәбиәт классиктарының мәшһүр әҫәрҙәренән өҙөктәрҙе яттан һөйләү этабы бик һөҙөмтәле үтте. Иң мөһиме, конкурстар сиктәрендә уҙғарылған "Оҫта педагог" һәм "Тикшеренеүсе педагог" ярыштары уҡытыусыларҙың йәмғиәттәге ролен дөрөҫ баһаларға ярҙам итеүенә тағы бер ҡат инандыҡ. Әйткәндәй, был юғары исемдәргә быйыл бөтәһе 45 уҡытыусы лайыҡ булды, - тине Сынтимер Биктимер улы үҙ сығышында.

"Башҡортостандың баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы - 2015" XVIII ҡала конкурсы еңеүсеһе - Өфө ҡалаһының 58-се лицейынан математика уҡытыусыһы Рима Рожнина, ә "Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2015" XI конкурсы еңеүсеһе тип М.Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы педагогы Айгөл Игелекова танылды. Улар ошо көндәрҙә старт алған "Йыл уҡытыусыһы - 2015" конкурсының республика кимәлендәге ярышында баш ҡала вәкиле булараҡ сығыш яһаясаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Уҡытыусы һөнәренең мөһимлеген, педагог исемен йөрөтөүсе кешенең абруйын күтәреүсе йыл да үткәрелеп торған конкурсҡа ҡарата иғтибар, ҡыҙыҡһыныу һүрелмәй. Шуға күрә, әлегә беҙҙә уҡытыусылыҡ эшенә ҡарата ихтирам менән ҡарау юғалтылған гәҙәт түгел, тиһәк тә яңылышмаҫбыҙ, моғайын. Заман менән бергә атлаған, быуындан-быуынға белем таратҡан кешегә ихтирамһыҙ бағыу мөмкинме һуң инде!**

Сәриә ҒАРИПОВА.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# СУБСИДИЯ АЛ!

**Күп балалы ғаиләләр һәм яңғыҙ пенсионерҙар өсөн коммуналь түләүҙәргә субсидиялар алыу еңеләште. Республика башлығы Рөстәм Хәмитов ошо хаҡта ҡарар ҡабул итте.**

Документҡа ярашлы, күп балалы һәм тулы булмаған ғаиләләр өсөн стандарттар - 20 проценттан 15 процентҡаса, ә инде яңғыҙ йәшәгән пенсионерҙарға (60 йәштән өлкән ир-ат һәм 55 йәштән өлкән ҡатын-ҡыҙ) 20 проценттан 18 процентҡаса кәметелде. Был сара РФ Торлаҡ кодексының 159-сы статьяһына ярашлы, социаль яҡтан аҙ тәьмин ителгән граждандар категорияһына өҫтәмә ярҙам буласаҡ. 2015 йылда субсидия алыусылар һаныны 75 меңдән күберәк булыры күҙаллана.

Башҡа категория граждандарҙың торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәргә түләү күләме ғаиләнең дөйөм килеменең 20 процентынан артҡан осраҡта, улар ҙа субсидия алырға хоҡуҡлы.

Субсидия алыу өсөн Халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү республика үҙәгенең филиалдарына һәм бүлексәләренә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Талап ителгән документтар исемлеге менән БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы сайтының "Түләүҙәр, пособиелар, компенсациялар" бүлегендә танышырға мөмкин.

*ИҠТИСАДИ ХӘЛДӘР*

# САНКЦИЯЛАР ҠУРҠЫТАМЫ?

**АҠШ һәм уның көслө ҡыҫымы аҫтында Евросоюз илдәре Рәсәйгә ҡарата санкциялар ҡуллана башлауға бер йыл уҙҙы. Бер-нисә этаптан торған сикләүҙәрҙең эстәлеге нимәгә ҡайтып ҡала?**

Санкцияларҙың беренсе этабы уҙған йылдың 4-се мартынан алып апрель урталарына тиклемге осорҙо үҙ эсенә ала. Уларҙың эстәлеге лә, йөкмәткеһе лә, һуңғылары менән сағыштырғанда, көлкө тойола - Рәсәйҙең ҡайһы бер сәйәсмәндәренә һәм эшҡыуарҙарына визаны сикләү, санкция индергән илдәрҙә иҫәптәрҙе "туңдырыу", уларҙың биләмәһендә эшҡыуарлыҡ алып барыуҙы тыйыу һәм башҡалар.

Икенсе этаптағы (апрелдән июнь уртаһына тиклем) сикләүҙәр, күпселек осраҡта, оборона комплексына һәм уның менән бәйле өлкәгә ҡағылды. Санкцияларға ярашлы, сикләүҙәр индереүсе илдәрҙең компанияларына Рәсәйҙең оборона комплексында тура йәки ҡусмә ҡулланып була торған тауарҙар һатыу һәм хеҙмәттәр күрһәтеү тыйылды. Ләкин ул әйберҙәрҙең күпселеге (ҡайһы бер электрон һәм оптик компоненттарҙан тыш) үҙебеҙҙә етештерелеүен күҙ уңында тотҡанда, был сикләүҙәрҙең дә һөҙөмтәһе нолгә тигеҙ булды.

Санкцияларҙың өсөнсө этабы июль-сентябрь айҙарына тура килде һәм үҙ эсенә дәүләт ҡатнашлығындағы эре компанияларға, оборона һәм энергетика комплексы компанияларына ҡарата сикләүҙәрҙе алды. Санкцияға эләккән компанияларға АҠШ һәм Евросоюз тарафынан кредит һәм инвестицион операциялар буйынса сикләүҙәр индерелде йәки ул операциялар бөтөнләй туҡтатылды. Шулай уҡ был компанияларға АҠШ-та һәм Евросоюз илдәрендә бизнес алып барыу ҙа тыйылды. Өсөнсө этап санкциялары бының менән генә туҡтаманы. Артабанғы санкциялар туп-тура Рәсәйҙең финанс өлкәһенә, йәғни банктар эшмәкәрлегенә ҡағылды. Санкция ҡулланыусы илдәрҙең банктарына, компанияларына Рәсәй банктарына, ниндәй формала булһа ла, оҙайлы срокка үҙ ресурстарын һатыу тыйылды. Шулай уҡ Рәсәй банктарына доллар һәм евро валюталары зонаһында ла финанс активтар менән ҡулланыу мөмкинлеге ябылды. Санкцияларҙың был төрө, һис шикһеҙ, Рәсәй банктары һәм компаниялары эшмәкәрлегендә кире роль уйнаны, шулай ҙа уның йоғонтоһон да артыҡ баһаларға кәрәкмәй, ти эксперттар.

Энергетика баҙарына баҫым яһау - санкцияларҙың дүртенсе этабы. Америка һәм Европа компанияларына Рәсәйгә тәрәндән (152 метрҙан тәрәнерәк) нефть һәм газ запастарын эҙләп табыу һәм эшкәртеү өсөн ҡоролмалар, шулай уҡ уларҙы эҙләп табыуҙың традицион булмаған технологиялар - быраулау платформалары, горизонталь быраулау өсөн деталдәр, Арктика шарттарында эшләү өсөн һыу аҫты, диңгеҙ ҡорамалдары, ҡатламды гидравлик шартлатыу өсөн программалар, дистанцион идара ителгән һыу аҫты аппараттары, юғары баҫымлы насостар менән тәьмин итеү тыйылды. Былар, әлбиттә, мөһим әйберҙәр, ләкин уларҙың Рәсәйгә нәҡ әлеге мәлдә әллә ни кәрәге лә юҡ, сөнки хәҙергә нефть һәм газ сығарған урындарҙа запас етерлек. Улар бөткәнсе, йәғни сығарыуы ҡатмарлы булған нефтҡә тотонғансы, яңы шарттарға яраҡлашыу өсөн ваҡыт етәрлек. Шулай уҡ уларҙы башҡа урындан, мәҫәлән, Азиянан ала башларға була. Шуға күрә ил иҡтисадына дүртенсе этап та санкция ҡулланыусылар көткән һөҙөмтә килтермәне.

Бишенсе этап (2014 йылдың сентябре - 2015 йылдың ғинуары) - энергетика ресурстарҙың, атап әйткәндә нефттең, хаҡын төшөрөү.

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Анемия

❖ Йөҙөмдә (виноград) ҡан яһалышын яҡшыртыуға булышлыҡ итеүсе микроэлементтар күп. Ай буйына кагор шарабын ашар алдынан көнөнә 3 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсегеҙ. 1 аҙна тәнәфес яһағас, тағы шулай дауам итегеҙ.

### Юғары ҡан баҫымынан

❖ Икмәк телемен ваҡ киҫәктәргә бүлеп, һәр киҫәккә 4-әр тамсы бесәй үләне (валериана) төнәтмәһе тамыҙырға, 2-3 сәғәт һайын бер киҫәкте йәлап ҡына сәйнәргә. Дауаны 1 ай дауам итһәгеҙ, яҡшыраҡ булыр.

❖ 1 лимон һуты ҡушылған 1 стакан йылы һыуҙы ас ҡарынға эсеү ҙә ҡан баҫымын төшөрә.

❖ Кистән тары ярмаһын бүрттерергә ҡуйып, иртәнсәк шуға ҡабаҡ ҡушып, бутҡа бешерегеҙ. Икенсе көнөнә ҡабаҡ урынына кипкән еләкемеш ҡулланығыҙ.

❖ 1,5 литр һыуға уртаса ҙурлыҡтағы 5 картуф ҡабығының ҡайнатмаһын көн буйына эсеү ҙә файҙалы.

### Бөйөрҙән таш сағырыу

❖ Борсаҡ үләнен сәскә атмаҫ элек йыйырға, ваҡлап, 2 ҡалаҡ үләнгә 1,5 стакан яңы ҡайнап сыҡҡан һыуҙы ҡойоп, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм ашар алдынан 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

### Һалҡын тейһә...

❖ Хәҙер ялан баш йөрөү, йоҡа кейеүеү модала, шуға ла һалҡынға бирелеүсе күп. Һалҡын тейһә, 10-ар грамм мәтрүшкә, үгәй инә япрағы, 20 грамм ваҡланған бесәй борсағы (алтей) тамырын ҡушып болғатырға. 2 ҡалаҡ үләнгә ярты литр һыу ҡойоп, 15-30 минут төнәтергә. Ашарҙан 20-30 минут алда көнөнә 4 мәртәбә йылы килеш яртышар стакан эсергә.

### Тауыш бөтһә...

❖ Кәстрүлгә 1 стакан һыу ҡойорға, ярты стакан әнис үләне орлоғо һалып, 15 минут ҡайнатырға. Һөҙөргә һәм 2 ҡалаҡ бал өҫтәргә. Ярты сәғәт һайын эсергә.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҺАРЫҠТЫ ИЗГЕЛӘШТЕРЕҮ

**Фольклорҙың төрлө жанрҙарында, йолаларҙа, лингвистик материалдарҙа, биҙәү-ғәмәли сәнғәттә һарыҡ та кешегә хас сифаттарға - телмәргә, фекерләүгә, тойғоларға, ихтыяр көсөнә эйә итеп һүрәтләнә.**

Икенсе яҡтан, йолаларҙа кеше һарыҡ ҡиәфәтенә инә ала тигән фекерҙәр ҙә сағылып ҡала. "Ала ҡарға" әкиәтендә үҙен эҙәрлекләүселәрҙән ҡасып, ҡыҙ һарыҡҡа әйләнә. Ошо уҡ мотив "Һуҡыр тәкә" тигән балалар уйынында осрай. Һуҡыр тәкә итеп һайланған баланың күҙен бәйләйҙәр, кем беренсе булып тотола, артабан шул һуҡыр тәкә була. "Ҡурай тураһындағы әкиәт"тең төрлө варианттарында маңлайында мөгөҙө булған хан һүрәтләнә. Тышҡы ҡиәфәте менән хан тотем-тәүбаба, ярым кеше-ярым хайуанға оҡшаған, был күп халыҡтарҙың мифологияһына хас. Кеше менән һарыҡтың "туғанлығы", уларҙың бер тотемик тәүбабанан барлыҡҡа килеүе тураһындағы тотемик фекерләү реликттары ырыуара терминдарҙа ла сағылып тапҡан. Мәҫәлән, мул-гәйнә ырыуында - ҡуҫҡар, бала-ҡатайҙарҙа - бәрән, һарт-әйлеләрҙә - тәкеш ("тәкә" зоонимынан), үҫәргән, түңгәүерҙәрҙә - бәрәс һәм ҡара һарыҡ тигән аралар осрай. Ҡуҫҡар, Аҡҡуҫҡар, Байғуҫҡар, Тәкәй, Ҡолтәкә, Аҡҡуй, Ҡуйкүрпәс, Ҡуйһылыу, Күрпәс, Ҡуҙыйкүрпәс антропонимдары ла уларға ҡушыла.

"Ҡот ҡойоу" йолаһында, әгәр ҙә кеше ныҡ ҡурҡҡан булһа, йөрәге урынынан ҡуҙғыған тип, һарыҡ һуйып, уның һуғыуҙан туктап өлгөрмәгән йөрәген ауырыусың күкрәгенә "ултырталар". Бала башын оҙаҡ тота алмаһа, ата-әсәһе ҡорбанға һарыҡ килтерә. Ҡорбандың башын һәм муйынын ашағанда умыртҡа бағанаһының һеңерҙәрен һәм кимерсәген өҙмәй ашарға кәрәк. Һуңынан уны ишек башына элеп ҡуялар. Һарыҡ умыртҡаһының муйын өлөшө ҡатһа, баланың да муйыны нығынып китә. Ревматизмды дауалау өсөн ауыртҡан быуындарҙы һарыҡ тиреһе менән урағандар. Йәғни, һарыҡ, тәүбаба булараҡ, кешеләрҙе (бигерәк тә балаларҙы) яныңнан "тыуҙырыу" һәләтенә эйә, тигән ышаныу булған. Тотанаҡ ауырыуын Ҡурған башҡорттары шулай уҡ ҡорбан салып дауалаған. Ауырыу уның итен ашамаған. Һарыҡтың тиреһен, һөйәктәрен, ҡанын кеше йөрөмәгән ергә алып барып ҡалдырғандар һәм тиҙерәк ул урындан китергә тырышҡандар.

Башҡортта, кемдер йыраҡ юлға йәки һуғышҡа юлланһа, был кешегә мал инселәйҙәр. Әгәр ҙә ул имен-аман ҡайтһа, ошо малды ҡорбан килтерәләр. Баланың ҡолаҡ арты сейләнһә, уға шулай уҡ мал инселәйҙәр һәм был малдың ҡолағының осон ҡырҡып, ин һалалар. Нәҙер ҡорбаны - берәй уй-теләк үтәлһен өсөн салына. Ҡорбан малының ҡанын маңлайға, биткә һөртөү күренеше лә булған борон. Был иһә шулай уҡ "яңынан тыуыу" идеяһы менән бәйле булһа кәрәк. "Урал батыр" эпосында ла Йәнбирҙе улдарын турһыҡтағы ҡанды эсеүҙән тыя. Ышаныуҙар буйынса, ниндәйҙер йәнлектең ҡанын эскән кеше уның көсөн үҙенә ала. Тимәк, ҡанды маңлайға һөртҡәндән һуң, был кеше шулай уҡ янынан "тыуып", һарыҡтың үҙе кеүек көслөгә әүерелә.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова. "Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан. (Дауамы бар).**

ӨФӨЛӘРГӘ БАРАМ ӘЛЕ...

# ЗЫЯ НУРЫЕВ ЙӘНӘШЕНДӘ...

## күргәҙмәләрҙә йөрөнөк

**1959 йылдың көҙө. Унынсы класты тамамлап, үҙебеҙҙең Баймаҡ районы Төркмән ауылында китапхана һәм клуб мөдире булып эшләй башланым. Ул йылдарҙа урта мәктәп тамамлағандар юҡ иҫәбендә ине. Ауыл бәләкәй булһа ла башланғыс мәктәп, медпункт, клуб бар, шуға күрә, тәүге комсомол ойошмаһы секретары, агитатор эшен дә миңә алып барырға тура килде.**

Йәш саҡ, дәртле саҡ, концерттар, спектаклдәр ҡуябыҙ, өмәләр ойошторабыҙ, күмәк эштең уртаһында ҡайнала. Урып-йыйыу эштәре ваҡытында бигерәк тә агитация эше йәнләнә, "Боевой листок"тар, "Молния" сығарам. Өс көн һайын сығарылған был стена гәзиттәрендә яҡшы эшләгән игенселәр, комбайнерҙар, механизаторҙарҙың эше яҡтыртыла. Ырҙында эшләгән кешеләр араһында үҙен тәртипһеҙерәк тотҡандарҙы ла ҡәләм осона эләктерәм. Бер ваҡыт гел генә үҙ һүҙен һүҙ итеп, әрһеҙләшеп йөрөгән апайҙы "Үҙ һүҙле, үгеҙ күҙле" тигән баш менән гәзиткә яҙып, стенаға элеп ҡуйҙым. Быны партком секретары Әхәт Иҫәнтаев уҡып: "Үәт, һеңлем, дөрөҫ эшләгәнһең, тәнҡит кешене төҙәтә ул", - тип маҡтап китеүе иҫтә ҡалған. Шаулап-гөрләп урып-йыйыу эштәре тамамланғас, "Сибай" совхозы алдынғы игенселәре менән бергә 17-18 йәшлек агитаторҙарын да Өфөгә семинарға ебәрҙе. Поезға ултырып, тәү тапҡыр баш ҡалабыҙ Өфөгә килеп төштөм.

Килеп төшөүгә, беҙҙең делегацияны ла ҙур автобустар көтөп тора ине, бәхетиһән, республика кимәлендә үткәрелгән семинарға алдынғы малсылар, һауынсылар, агитаторҙар, партком секретарҙары бөтә районларҙан да саҡырылған булған икән. "Башҡортостан" ҡунаҡханаһына урынлаштырҙылар. Ял иткән арала бөҙрәхаңға инеп, сәстәрҙе бөҙрәләтеп алғас, иртәгә тиклем ваҡыт бар әле, тип, киске Өфө урамдары буйлап йөрөргә сыҡтыҡ. Ҡаланың урамдары таҡыр, яп-яҡты уттар, иҫ киткес бейек, матур йорттар - мөғжизә илендә йөрөгән кеүекһең. Мин беренсегә күрә инем быларҙың барыһын да, ә иптәш ҡыҙҙарым Өфө менән таныш булып сыҡты. Шунда береһе: "Эй, ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ ауыл хужалығы институтына барайыҡ, бәлки, таныш егеттәрҙе осратырбыҙ", - тине. Киттек. Әммә кис булыу сәбәпле, ул тирәлә бер кемде лә осратманыҡ, ҡыҙҙар ятаҡҡа инеп, таныш егеттәренә записка яҙып, ишек янындағы ҡумтаға төшөрөп китте. Минең дә беҙҙең совхозда практика үткән танышым бар ине бында, әммә мин унайһыҙландым һәм яҙған запискамды шунда уҡ йыртып ташланым.

Ә иртәгеһенә иртә менән КПСС Өлкә комитетының беренсе секретары - мөһабәт кәүҙәле Зыя Нурый улы Нурыев етәкселегендә автобустарға ултырып, ниндәйҙер алдынғы хужалыҡтарҙа йөрөнөк. Ямғырлы, бысраҡ көҙгө көн ине, шуныһы иҫтә ҡалған, Зыя Нурый улы ботинкаһына галош кейҙереп алғайны - ул саҡтағы мода булғандыр инде. Икенсе көндө автобустар менән ауыл хужалығы күргәҙмәһенә алып килделәр, унда күргәндәрҙе килештереп һөйләп булмаç - иҫ киткес донъя ине ул! Әкиәт илендә йөрөгәндәй хис иттек үҙебеҙҙе. Матур тәьҫораттар менән Өфөгә, ҡунаҡханаға ҡайтырға сыҡтыҡ. Ҡайтҡанда автобусыбыҙға бер төркөм йәштәр ултырҙы. Күп кеше араһында бик таныш бер йөҙҙө күреп ҡалдым, ул беҙҙең ауылда практика үткән баяғы таныш егет ине. Мин уға һүҙ ҡушманым, оялдым, сөнки көн йонсоу булғанлыҡтанмы, әллә миҙгелгә ярашлы кейем булмағандырмы, ҡышҡы пальто кейеп алғайным. Әҙәплелекме, әллә ғорурлыҡ булғандырмы был ҡылығым? Ҡайтҡас, ҡунаҡхананан ҡыҫҡа ғына хат яҙып һалдым: "Фәрүәз, мин һине автобуста күрҙем, әммә өндәшмәнем... Мин иртәгә иртүк самолетта Баймаҡҡа ҡайтып китәм, хуш". Фәрүәз хатты алып уҡыған, үкенес тулы хаттары килеп торҙо һуңынан да...

Баш ҡалабыҙ Өфө менән хушлашып, матур тәьҫораттар алып, күп кешеләр менән аралашып, тағы ла дәртләнеп эшләргә көс, энергия алып, самолет менән Өфө-Сибай рейсында ҡайтып төштек. Бынан һуң да Өфөгә күп тапҡырҙар барырға, уның менән яҡынданыраҡ танышырға форсат булды. Ләкин тәү башлап Өфөгә барған көндәр хәтерҙә онотолмаçлыҡ тойғолар ҡалдырыуы һаман да иҫтән сыҡмай.

**Роза ИҘРИСОВА-ЫРЫҪМӨХӘМӘТОВА. Баймаҡ районы.**

БАШ ЙОРТОБОҘ

# УРАМЫНАН АТЛАП ҮТЕҮ...

## йәнгә ял ғына



**Һәр ҡаланың үҙенең сырайы, йөҙө һәм битлеге була. Ҡайҙа ғына йәшәмәһен, һәр башҡорт өсөн Өфө донъялағы иң матур ҡала булып ҡалалыр, ул уны үҙенсә идеаллаштыра, ыңғай яҡтарын ғына күрә. Шуның өсөн дә баш ҡалабыҙҙың сырайы яҡты. Өфө тураһында һөйләгәндә, күптәребеҙ уны мәҙәни һәм рухи үҙәк, тип билдәләр ине.**

Баш ҡаланың ошо нурлы сырайын һағынып, төрлө сәбәптәр тапҡан булып, мин дә бында йышыраҡ килергә тырышам. Заманалар үҙгәрһә лә, рухи Мәккә булыуҙан туктамай Өфөбөҙ. Хатта үҙәк урамдарҙан йәйәү бер генә үтһәң дә, бер нисә айға етерлек илһам алаһың, күңелең була, йөрәгең ял итә.

Ҡаланың йөҙөн көндәлек тормошобоҙға хас нәмәләр тәшкил итә. Өфөлә барған ҙур төҙөлештәр - уның көн һайын үҫеүен, ҙурайыуын күрһәтеп тора. Аҙым һайын сауҙа, ял итеү үҙәге - халыҡ күңел асып ҡына йәшәй бында, ахыры, тип уйлап та ҡуяһың. Машиналар ҙа күбәйгәндән-күбәйә. Йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән тротуарҙар машиналар ҡуйыу урынына әүерелгән икән.

Шулай ҙа Өфөнөң йөҙө гел үҙгәреп тора. Әле бына йәй була торған ҙур сәйәси ваҡиғалар айҡанлы, урамдар төҙәкләнеп ҡалған, тик үҙәктән, төп юлдарҙан ситтә урынлашҡан йорттарға иғтибар һаман етмәй икән. Һирәгерәк осраһа ла, Әҙәбиәт йылына бағышлап, бөйөк яҙыусыларҙың ҡанатлы һүҙҙәре яҙылған реклама щиттары ла ҡалаға үҙенсәлекле төҫ бирә. Тик улар араһында әҙәбиәткә, китап уҡырға ратыуҙың кешенең иң күркәм сифаттарының береһе икәнлеге тураһында һөйләгәндәре күберәк булһын ине, Әҙәбиәт йылында, исмаһам, уҡыуға һөйөү уяныр ине ҡайһы берәүҙәрҙең күңелендә.

Өфөнөң үҙенә генә хас милли йөҙө барлыҡҡа килһен ине, тигән теләгем дә бар. Әйткәндәй, һоро йорттарҙың стенаһына төрлө һүрәттәр төшөрөп, уларҙы биҙәргә тырышыу ҙа яҡшы башланғыс ине бит. Интернет селтәрендә бер йортҡа төшөрөлгән бейеүсе ҡыҙҙың һүрәтендә ниндәйҙер әҙәпһеҙлек күреүселәр ялҡынланып фекер ҙә алышҡайны былтыр, әммә, минеңсә, сәнғәттә насарлыҡ эҙләү - үҙе уҡ хата күренеш. Шуның шикелле, баш ҡалабыҙҙағы кире күренештәрҙе күреү өсөн артыҡ аҡыл кәрәкмәй, ә бына уның ыңғай яҡтарын ғына күреп йәшәй белеү - оло мәртәбә ул.

Төрлө саралар, фестивалдәр, байрамдар ҡаланың битлеге булып тора. Бер көн ҡала тантаналы битлек кейһә, уның һағыш битлеге лә осраштыра. Әммә баш ҡалаға хас булмаған бер генә битлек бар - ул да булһа, битарафлыҡ. Ҡалабыҙға, милләтебеҙгә, республикабыҙға битарафлыҡ бер-берендән хәләнә инә белмәүҙән, бер-берендә ихтирам итә белмәүҙән башлана. Шуға иң тәүҙә бер-беребеҙгә аяулы булайыҡ, шул саҡта ҡалабыҙ ҙа балҡып торор.

**Зөлхизә ИШТИМЕРОВА.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалының билдәле журналисы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһы, халҡыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәре тураһындағы яҙмаларын дауам итәбеҙ.**

# ҠАН БУЙЫНСА БАШҠОРТТАР...



## тамырҙарын иҫкә төшөрһән

### Балыҡсылар башҡорт ихтилалдарында

Балыҡсыларҙың артабанғы тарихы урыҫ сығанаҡтарында яҡшы сағылдырылған. Балыҡсы улысы Башҡортостандың Себер даруғаһына ҡарай. 1725-1726 йылдарҙа Көнгөр бургомистры Юхнев был улыста 120 ихатала "һуғыша алған" 360 ир-егет булыуын билдәләй. Биш кешегә бер яугир тигән стандарт нисбәттән сығып һанағанда, был ерҙә 1800-2000 кеше йәшәгән булһа кәрәк.

Ә.З. Әсфәндийәров: "Балыҡсы улусы - халыҡ азатлығы өсөн көрәшеүсе ҡурҡыу белмәҫ яугирҙар төйәге", - тип яҙа. Себер ханлығын тергеҙеү, хатта Башҡорт ханлығын төҙөү лозунгыһы аҫтында үткән 1662-1664 йылдарҙағы ихтилалда балыҡсылар Күсем хандың ейәне Көсөк хан яғында алыша. 1664 йылда воевода А. М. Волконский уларға: "Товарищ наш стольник и воевода князь Дмитрий Андреевич Волконский вас, айских волостей и Балыхчинских, за ваше неправды повоевал, побил и в полон поимал многих и разорил, и то вам разоренье от себя учинилось, от вашего воровского заводу и умыслы", - тигән хәбәр ебәрә.

1704-1711 йылдарҙағы ихтилалда, Себер даруғаһы башҡорттары, шул иҫәптән балыҡсылар, хөкүмәт ғәскәрҙәре менән Өфө өйәҙе территорияһында һуғыша. Улар шулай уҡ күрше Ҡаҙан һәм Көнгөр өйәҙҙәренә лә походтар эшләй.

Балыҡсыларҙың 1735-1740 йылдағы башҡорт ихтилалында ҡатнашыуы тураһында күп кенә мәғлүмәт һаҡланып ҡалған. 1736 йылдың башында хөкүмәт ғәскәрҙәре командирҙарының береһе полковник А. И. Тевкелев Себер даруғаһында баш күтәреүселәрҙе баҫтырыуҙа ҡатнаша. Балыҡсы улысының Һөйәнтәҙ ауылы кешеләре Ялтыр Досаев һәм Ғабдулла Һарткилдин, язалау ваҡытында карателдәргә: "Оная деревня Сеянтус и своей Балыхчинской волости башкирцы намерены были, чтоб идти на лыжах и на конях, соединясь з бунтующими ворами Юсупом и Тюлкучуром, напасть сзади и команду Тевкелева разбить, как оная команда выйдет из леса" (Башҡортостан тарихы буйынса материалдар" китабының 4-се томында килтерелгән документтарҙан) - тип әйтергә мәжбүр була. Был турала белеп ҡалған Тевкелев, Һөйәнтәҙ ауылына инеп, ҡот осҡос ҡан ҡойош ойоштора. Был ҡанһыҙлыҡтың шаһиты булған П. И Рычков: "Близ тысячи человек с женами и детьми их во оной деревне перестреляно и от драгун штыками, а от верных башкирцев и мещряков копьми переколото; сверх того сто пять человек собраны были в один амбар и тут огнем сожжены", - тип яҙа. Тик, ниңәлер, кешеләрҙе күпләп ҡырыу факты түгел, ә тереләй яндырылған балыҡсыларҙың реакцияһы билдәле тарихсының асыуын килтерә: "... при чем всего удивительнее, что многие из тех воров, будучи в огне, имевшиеся в амбаре копья со многими хулбными и браными словами на стоящих тут драгун выбрасывали и несколько их тем поранили", - тип яҙа ул. Артабан тарихсы ауыл халҡының тулыһынса, енесенә һәм йәшенә ҡарамайынса, бәләкәй балаларҙан алып олоһона тиклем - ут һәм ҡорал менән юҡ ителеүен, ә өйҙәр көлгә әйләндерелеүен яҙа. Полковник Тевкелевтың иҫеме башҡорт халҡында яуыҙлыҡ мөһөрөнә әйләнә. Был турала "Тәфтиләү" йырында шулай тип әйтелә:.

*Иҙел буйҡайҙары,*
*ай, ҡаялыҡ -*
*Полковник Тәфтиләү*
*яу урыны.*
*Башҡорт илкәйҙәрен*
*утҡа тотҡас,*
*Алтынланды уның*
*яурыны.*
*Аҫтындағы эйәр*
*атҡа тейер,*
*Эйәре лә белмәҫ, ат белә.*
*Тәфтиләүҙең ҡылған,*
*ай, ҡәһәрен*
*Үҙе белмәһә лә, ил белә.*
*...Ҡара ла ғына*
*урман ҡая бите,*
*Шаулайҙыр ҙа кисен,*
*ел саҡта.*
*Ташҡайҙарға соҡоп*
*яҙҙым ҡарғыш,*
*Ейәндәрем уҡыр*
*бер саҡта.*

Хөкүмәт ғәскәрҙәренең репрессив ысулдары балыҡсыларҙың хәрби рухын һындыра алмай, киреһенсә, уларҙа үс алыу тойғоһон арттыра һәм яңы болаларға этәрә. Ихтилал етәкселәренең береһе Йосоп Арыҡов 1736 йылдағы ихтилалдың яңы көс менән тоҡанып китеүенең сәбәбе "Мырҙа полковниктың аманаттар биргән Балыҡсы һәм башҡа улыстарҙы гәйепһеҙгә ҡырыуы", ти. Баш күтәреүселәр 1736 йылдың июлендә Төлкөсура Алдағолов етәкселегендә Көнгөр өйәҙенең Красноярск ҡәлғәһенә һөжүм итә. Уны һаҡлаған полковник Мартаковтың отряды ҡыйратылып һәм ҡасырға мәжбүр була. Баш күтәреүселәр үҙҙәренең был аҙымын: "Беҙ һуғышты мырҙа Тевкелев менән алып барабыҙ", - тип аңлата, шулай уҡ полковниктың бер нисә сәғәт алдан ғына ҡасыуы хаҡында ла әйтәләр. Күп документтарҙан күренеүенсә, артабанғы ваҡиғаларҙың ҙур ғына өлөшөндә Тевкелевҡа үс алыу мотивы беренсе планға күсеүен күрергә була.

1773 йылда Башҡортостан территорияһында яңы ихтилал ҡуба. Уның сәбәбе "мөғжизәле рәүештә ҡотҡарылған" батша Петр III була. Ләкин "Пугачевлыҡ" сиктәрендәге башҡорт ихтилалы айырым хәрәкәтте тәшкил итә. Уның үҙ идеологияһы, маҡсаттары була. Башҡорттар улар ризалығынан тыш аҫаба ерҙәрендә һалынған заводтарҙы һәм ҡәлғәләрҙе юҡ итеү, ошо ерҙәрҙе ҡабаттан ҡайтарыу мөмкинлеген эҙәрлекләй. Балыҡсылар ҙа 1773-1774 йылдарҙағы ваҡиғаларҙа әүҙем ҡатнаша. Улар сафынан бер нисә билдәле ихтилал етәксеһе сыға. Иң билдәлеләре Сөләймән Итҡустин була. Ул бөгөнгө Ҡариҙел районы территорияһында булған Итҡусты ауылында тыуа. С. Таймасов яҙыуы буйынса, 1774 йылда, Пугачев отрядтары тар-мар ителгән һәм яуҙан ситләшкән ихтилалдың иң ауыр мәлендә Сөләймән яуҙы дауам итә. 1774 йылдың 22 апрелендә Бөрө ҡалаһынан төньяҡтараҡ булған Тимкино ауылында ул майор Тютчевтың отряды менән алышҡа инә. Был яуҙа боласылар тар-мар ителә, ә Сөләймән Итҡусин үлтерелә.

Пугачев болаһына ҡараған документтарҙа "Көнгөр өйәҙенең башҡорт казактары старшинаһы" Ҡунаҡбай Йомаев тураһында ла телгә алына. Ул 1774 йылдың башында баш күтәреүселәр отряды менән идара итеп, полковник Мәүлит Айытов һәм Ҡәнзәфәр Усаев менән берлектә, Исәт ҡәлғәһен баҫып алалар. Ошонан алда ғына был ҡәлғәгә Екатеринбургтан Красноуфимскиҙы һаҡлау өсөн ебәрелгән 130 кешенән торған отряд килә. Көтөлмәгән һөжүмдән юғалып ҡалған хөкүмәт ғәскәрҙәре әсирлеккә бирелә. Каратель командаһының командиры шунда уҡ язалана. Һуңынан Ҡунаҡбай Йомаев Салауат Юлаев ғәскәрҙәре составында Көнгөрҙө ҡамауҙа ҡатнаша.

### Йомғаҡлау

Шулай итеп, балыҡсы ырыуының барлыҡҡа килеүе төньяҡ-көнсығыш башҡорттары менән бәйле. Улар башҡа башҡорт ырыуҙарына хас булғанса, ырыу-клан системаһы буйынса үҫешәләр. Был система башҡорт йәмғиәтенә ҡараған һәр ырыу тигеҙ хоҡуҡтарға эйә була. Тәү сиратта был хәрби ойоштороуға һәм ер мөнәсәбәттәренә ҡағыла. Ләкин ошо системаның боҙолоуы халыҡтың милли-мәҙәни йөҙөн үҙгәртә башлай. Аҫабалыҡ хоҡуҡтары кәмегәндән һуң төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының бер өлөшө мишәрҙәр, типтәрҙәр, Ҡаҙан татарҙары менән яҡынлаша. Бер нисә тиҫтә йылдан һуң был уларҙың милли уҙаңын юғалтыуға килтерә.

Балыҡсы ырыуының тарихы тәрән тамырлы. Уның төпкөлөндә Ҡытайҙы яулаусы, һуңынан уларға үҙ исемдәрен биреүсе ҡатайҙарҙың, Майҡы бей Уйшиндың ҡурҡыу белмәҫ яугирҙарының һәм Урал буйы черемистарының ҡатнашлығы ята. Этногенездың ҡатмарлылығы ҡурҡыу белмәҫ, бойондороҡһоҙ кешеләрҙән торған төньяҡ башҡорттарының айырым тибын барлыҡҡа килтерә. Урта быуаттарҙа балыҡсыларҙың ата-бабалары Батый хандың ғәскәрҙәре составында көнбайышҡа походҡа йөрөй, һуңынан Себер һәм Ҡаҙан ханлыҡтарында хеҙмәт итәләр. Һуңынан башҡорт ихтилалдарында халыҡ азатлығы өсөн әүҙем көрәшәләр. Уларҙың үткәне бар Башҡортостан тарихын сағылдыра.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 2014 йылдың 50-52-се, 2015 йылдың 1-8-се һандарында).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Исламға тиклем булған дини йолаларҙың сағылышы

Ай башҡорт әкиәттәрендә ир затынан тип һанала. М. В. Лоссиевский башҡорттарҙың ай тураһындағы хикәйәтенән һыуға килгән башҡорт ҡыҙының күктән йылмайып баҡҡан айға ҡарап, минең шундай матур ирем булһа, мин уға батыр ул табып бирер инем, тип хыялланыуы һәм айҙың уны үҙенә кәләш итеп алыуы, шул ваҡыттан һуң айҙа көйәнтәле ҡыҙ һыны тороуы хаҡында бәйән ителгән миҫал килтерә.

Йондоҙҙар һәм планеталар, башҡорттар күҙаллауынса, һауала аҫылынып тора һәм күккә йыуан тимер сылбыр менән нығытып ҡуйылған. Айырым йондоҙлоҡтарҙың исемдәре лә бар: Етегән (Большая Медведица), Сулпан (Венера), Өлкәр (Плеяды), Арҡанаҡ, Тимер Ҡаҙыҡ (Полярная звезда), Әңерсе йондоҙ, Зөһрә йондоҙ, Көйөнтә йондоҙ, Һары ат, Буҙ ат (Етегән йондоҙлоғондағы йондоҙҙар һәм йондоҙлоҡтар), таң сулпаны (утренняя зарница), шәфәҡ йондоҙ (вечерняя зарница), Ҡош юлы йәки ҡаҙ юлы (Млечный путь). Йәшен һәм күк күкрәүе, башҡорттар фекеренсә, Юғары илаһ ҡөҙрәте менән башҡарыла. Ул фәрештәне шайтанға яҙа биреү өсөн ебәрә: фәрештә бер-береһенә бәрелгәндә шартлаған тауыш сығарыусы болоттарҙы ҡыуалаған. Фәрештә шайтанды, кешеләрҙе аҙҙырып йөрөгәне өсөн, эҙәрлекләп, осона утлы таштар бәйләнгән сыбыртҡы менән һуҡтырған. Һуҡҡан ыңғайы таштар өҙөлөп шайтанға барып тейгән һәм йәшен ялтлаған. Шайтандар йәшендән ҡурҡа һәм йәшен ваҡытында кеше йәшәгән торлаҡта йәшенә. Был осраҡта йәшен, шайтанды эҙләп, өйҙө лә атырға мөмкин. Шуға күрә башҡорттар, шайтан өйгә инмәһен өсөн, йәшен ваҡытында тәҙрәләрҙе, ишекте, мөрйәләрҙе нығытып ябып ҡуя. Ҡайһы бер ваҡытта шайтандар ямғыр ваҡытында индереүҙе үтенеп илаған бала сүрәтенә лә инә. Йәшен атҡан өйҙә янғын сыҡһа, һыу һибеү гонаһ һаналған, шуға күрә әсегән һөт ярҙамында һүндергәндәр.

Башҡорттарҙың ел-дауыл һәм башҡа шундай күренештәр тураһындағы күҙаллауҙары ҡыҙыҡлы ла, үҙенсәлекле лә. Улар ҡойондо йылан менән сағыштырған. Ғөмүмән, йыланды башҡорттар яуыз йән тип иҫәпләгән, шул уҡ ваҡытта ғәжәйеп йән эйәһе булараҡ та ҡабул иткән. И. И. Лепехин: "Башҡорт йыланды үлтерһә, уның башын ергә тығып ҡуя", - тип яҙған. Инаныуҙар буйынса, йәнһе лә, йыландың башын ергә күммәһәң, эргәһенә дуҫтары килеп, билдәле үләндең тамырын килтереп, уның яраһына һала һәм йылан ҡабаттан терелә.

Башҡорттар йыланды ат тире һеңгән ҡамсы менән тиҙ генә үлтереп була икәнлегенә лә ышанған. Сөнки ат тире йылан өсөн үлемесле тәьҫир итә. И.И. Лепехин быға миҫал итеп шундай легенда килтерә: бер башҡорт Уралда Йылантауҙа йәшәгән ҙур йыланды бары тик ҡылысына ат тирен һөрткән өсөн генә еңгән.

**✓ Депутат мандатына эйә булғас та үҙемә үҙгәрмәҫкә, кешелекле булып ҡалырға, ауыл малайы икәнемде онотмаҫҡа һәм ауылға мәсет төҙөп ҡуйырға һүҙ бирҙем.**



# НАМЫҪЫМДЫ ДАНҒА

## йәки Депутат

**Бөгөн тормошобоҙҙа ысын ир-егеттәрҙең аҙ булыуына, ир-аттың ваҡланыуына зарланыуҙар йыш ишетелә. Ҡайһы берҙә хатта "Каруанһарай" фольклор-эстрада төркөмө егеттәре оранына ҡушылып: "Ҡайҙа һеҙ, башҡорт егеттәре?" - тип саң ҡаҡҡы, Диоген көпә-көндөҙ шәм яҡтыртып Кеше эҙләгән кеүек, бына ул, башҡортомдоң аҫыл ирҙәренең береһе, тип күрһәтерҙәй шәхесте эҙләп тапҡы килә. Баҡтиһәң, ил-йортобоҙҙа ундай азаматтар бар һәм берәү-икәү генә түгел, тик уларҙы күрә белергә, әңгәмәгә йәлеп итергә генә кәрәк икән. Шулай итеп, бөгөн запастағы полковник, "Ҡыҙыл Йондоҙ" ордены кавалеры, өс бала атаһы,юридик фәндәр кандидаты РФ Дәүләт Думаһы депутаты Иршат Юнир улы ФӘХРЕТДИНОВтың күңел серҙәрен асасаҡбыҙ.**

### Маяҡ булып балҡый бер хыял…

Биш йәшемдә китаптарҙы шытырлатып уҡый торғайным. Алты йәш тулғас, үҙемдән өлкәнерәк күршем Радик менән беренсе синыфҡа барҙым. Әммә уҡытыусы, бәләкәйһең әле, тип, Филиппок һымаҡ ҡулдан етәкләп, бүлмәнән сығарып ебәрҙе. Мәктәпкә барыу хыялым шул тиклем көслө булды, апай-абзыйымдар портфель тотоп, ранец аҫып сығып китһәләр, арттарынан көнләшеп ҡарап ҡалғаным әле лә хәтеремдә.

Уҡырға төшкәс иһә, класта лидер булдым. Сәмле булдым, ниндәйҙер ярышта еңелһәм, йүгереүҙәме, уҡыуҙамы, шул тиклем ауыр кисерә инем. Әммә тышҡа сығармайым, үсекмәйем, ләкин икенсе юлы беренсе урын алырға кәрәк, тигән маҡсатты үҙ алдыма ҡәтғи ҡуя инем. Уҡыуҙа ла ныҡ тырыштым. Өлкән синыфта хәрби әҙерлек дәрестәре инә башлағас, замкомвзвод итеп ҡуйҙылар.

Мәктәп йылдарында Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын даими рәүештә осрашыуға саҡыра торғайныҡ. "Зарница" уйындарында окоптар ҡаҙып, ағастан автоматтар эшләп, үҙебеҙҙе тыуған илдең ысын һаҡсыһы итеп тойоп, бирелеп китеп уйнай инек. "Офицеры" киноһын, башҡа шундай фильмдарҙы ҡарап үҫтек. Телевизорҙан һуғыш осорон сағылдырған башҡорт спектаклдәрен күрһәтһәләр, уларҙы күрше-күлән менән йыйылышып, күмәкләп ҡараныҡ. "Яҙҙың ун ете мәле" сериалынан ғына ла күпме рух алырға мөмкин. Шундай Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы киноларҙы ҡарағандан һуң мин буласаҡ профессиям тураһында етди уйлана башланым. Ул мотлаҡ героик профессия булырға тейеш ине. Шуға, ҡар менән йыуынып, спорт менән шөғөлләнеп, уҡыуҙа ныҡ тырышып, үҙемде йәштән әҙерләнем. Берәй хәрби офицерҙы күрһәм, унан ҡайҙа, нисек уҡығанын, уҡыуға нисек ҡабул иткәндәрен ентекләп һораштым. Әсәйем: "Шул уаянный тип хыялланып, хыялый булып бөтәһең инде", - ти торғайны.

10-сы класты тамамлағас, уйлап та тормай, М. В. Фрунзе исемендәге ике тапҡыр Ҡыҙыл байраҡлы Омск юғары дөйөм ғәскәри командалыҡ училищеһына барҙым. Башҡортостандан 13 егет киткәйнек, Өфөнән Радик Ғәлиев менән миңә генә ошо уҡыу йортона инеп уҡырға насип булды. 4-се курста уҡығанда икәүләп Төркөстан хәрби округына барырға теләк белдереп, рапорт яҙҙыҡ. Әммә РФ Оборона министрының 1985 йылда хәрби училище тамамлаусыларҙы бер йыл Советтар Союзында урынлашҡан частарҙа хеҙмәт иткәндән һуң ғына Афғанстанға ебәреү тураһындағы бойороғона ярашлы, теләгебеҙҙе кире ҡаҡтылар. Сөнки яңы ғына уҡыуын тамамлаусылар Союзда хеҙмәт итеп, үҙенең ниндәй офицер икәнен төшөнөргә, командир була аламы, һуғышҡа инергә психологик яҡтан әҙерме икәнлеген раҫларға тейеш ине. Частҡа килгәс тә Радик менән Афғанстанға барырға теләк белдереп, ҡабаттан рапорт яҙҙыҡ. 1985 йылдарҙа унан совет ғәскәрҙәрен сығара башлағайнылар һәм һуғыш бөтәр, унда эләкмәй ҡалырбыҙ, тип уйланыҡ. Үҙебеҙҙе ысын һуғыш шарттарында һынап ҡарау теләге бик көслө ине. Сөнки училищела беҙҙе һуғышҡа әҙерләнеләр, ихтимал булған дошмандарыбыҙ Ҡытай, Америка, ГФР булды. Уларҙың частарын, уларҙа күпме кеше, ниндәй ҡоралдар менән ҡоралланғандар, нисек һөжүм итәләр - барыһын да өйрәндек. Әммә ысынлап та дошман менән күҙгә-күҙ осрашырға тура килгәндә үҙебеҙҙе нисек тотасағыбыҙҙы күҙ алдына килтерә алмай инек, сөнки күнекмәләр ваҡытында "дошман" ролен шул бергә уҡыған иптәшең башҡара бит инде. Шуға, ысын һуғыштың, ысын дошмандың ни икәнен белеү өсөн мотлаҡ Афғанстанға барырға, уны үҙ күҙҙәребеҙ менән күрергә тейешбеҙ, тип иҫәпләнек. Ҡағыҙҙа күреүең - бер, күнекмәләр - икенсе, ә ысынбарлыҡ бөтөнләй башҡаса бит ул. Беҙҙең бәхеткәлер инде, ике өлкән лейтенант Афғанға барыуҙан баш тартты ла, улар урынына беҙҙе “утлы нөктә”гә ебәрергә мәжбүр булдылар. Беҙ бер йыл да хеҙмәт итеп өлгөрмәгәйнек. Кире уйлап, урыныбыҙға икенселәр табылып, уларҙы ебәреп ҡуймаһындар, тип, отпускыны ла ахырынаса ял итеп бөтмәйенсә, Радик менән частҡа кире киттек...

### Төштәремә һаман керә һуғыш…

Һуғышта булғандар, уны үҙ күҙе менән күргәндәр үҙе тере саҡта унан бер ваҡытта ла әйләнеп ҡайтмай. Ул һуғыш һиндә йәшәй, бергә хеҙмәт иткән егеттәр менән осрашҡы, һөйләшке килә. Икенсенән, көн һайын һуғыш төшкә инә. Психологик реабилитация үтергә кәрәк, тиһәләр ҙә, уны бер ваҡытта ла үтеп бөтөп булмай, сөнки кешенең уйлау ҡеүәһе бар. Философтар бит юҡҡа ғына, кеше үлеме менән бөтөн донъя үлә, тимәй. Кеше донъяның бер бәләкәй генә өлөшө һәм ошо бәләкәй генә өлөшкә ҙур донъя һыйған. Кеше үлеү менән уға һыйған донъя ла үлә. Ошо донъяһындағы бер бәләкәй генә донъя - һуғыш, икенсеһе - ғаилә, өсөнсөһө - туғандары, тыуған ере һ.б. Уларҙың береһен дә алып ташлап та, онотоп та булмай, был мөмкин дә түгел. Уны онотоу өсөн һин йә склероз менән ауырырға, йә бөтөнләй бәғерһеҙ, битараф кеше булырға тейешһең.

Афғанстанда беҙ ил именлеген һаҡлап һуғыштыҡ, феодаль-община тормошон социализмға үҙгәртеп ҡорорға тырыштыҡ, объекттар, күперҙәр төҙөнөк, гуманитар ярҙам ебәрҙек. Иң мөһиме, беҙ унда булғанда Афған армияһы ул төбәктәге иң көслө армияның береһенә әүерелде. Сөнки унда советниктар көслө, ҡоралланыу Советтар Союзыныҡы ине. Бөгөн иһә унда Америка ғәскәрҙәре тора. Улар, әлбиттә, афған халҡы өсөн бер нәмә лә эшләмәй. Бөгөн ҡайһы берәүҙәр, беҙҙең Афғанстанға инеү хата булды, тип тә белдерә. Ул ваҡытта Америка менән СССР араһында һалҡын һуғыш барҙы, ядро ҡоралһыҙланыуы тураһында һүҙ ҙә юҡ ине әле. Әгәр Америка алдараҡ инһә, беҙ көньяҡта рубежды юғалтыр инек. Ул саҡта улар беҙҙең Кубала урынлаштырылған ракеталарға яуап итеп, унда үҙҙәренең ядро ракеталарын ҡуйыр ине. Ә хәҙер улар быны эшләй алмай, сөнки ихтыяж юҡ - ҡоралһыҙландырыу бара. XXI быуатта берәү ҙә мәсьәләне ядро ҡоралы ярҙамында хәл итергә йыйынмай. Бары тик иҡтисади яҡтан ғына ҡыҫымға алалар, шуның өсөн дә Рәсәйгә ҡарата санкциялар ҡулланалар. Ленинград кеүек итеп, тышҡы донъянан айырып, блокадала ҡалдырырға теләйҙәр.

Афғанстандан һуң майор дәрәжәһендә грузин-абхаз низағына эләктем. XX быуат тамамланып килә, ә кеше һаман да милли мәсьәлә ерлегендә берберен үлтерә. Мин быны бер нисек тә аңламаным, башыма һыйманы һәм барып, шуны аңлағым, уларға аңлатҡым килде. Абхазияла саҡта Беренсе Чечен һуғышы башланды. Барлыҡ ваҡиғаларҙы телевизор аша ғына күрҙек. Афған юлын үтеүселәр өсөн был, ысынлап та, аптырарлыҡ хәл ине: үҙ илеңдә һуғыш барһын әле! Абхазиянан яраланып ҡайттым. Дауаланған ваҡытта уҡ Чечнянан демобилизацияланған егеттәр, юғалтыуҙар күп, тәьминәт насар, ғәскәрҙәр араһында үҙ-ара килешеп эшләү, бәйләнеш юҡ, тыл тәьминәте, кейем-һалым менән тәьмин итеү аҡһай, һалдаттар яҙмыш ҡосағына ташланған, контракт буйынса барған офицерҙар албырғап ҡала, тип мөрәжәғәт итә башланы. Тәжрибәле офицерҙар ҡайҙа икән, тип уйланып, уйҙарымдың осона сыға алмай, хәрби тәжрибәмә таянып, рапорт яҙып, Чечняға киттем. Сөнки атыш тауыштарына күнегеп, кәрәк ваҡытта ҡапыл ғына дөрөҫ ҡарар ҡабул итеү тәжрибәһе бар ине. Ысынлап та, һалдаттарға нисек окоп ҡаҙырға, төндә үҙеңде нисек торорға, посты нисек һаҡларға өйрәтеүҙән башларға тура килде. Бөгөн шуны әйтә алам: хәрби хеҙмәтем осоронда Чечня - минең өсөн ҡара һыҙат булды. Чечнянан һуң совет заманындағы армияны юғалтҡанлыбыҙҙы аңланым.

### Ысын офицер. Ниндәй ул?

Һәр ир-ат һымаҡ, офицер ысын мәғәнәһендә ҙур хәрефтән яҙылған Кеше, батыр, ҡаһарман, ғәҙел булырға һәм үҙ иңенә яуаплылыҡ алыуҙан ҡурҡмаҫҡа тейеш. Йәғни, бойороҡ бирһәләр - эшләйем, юҡ икән - эшләмәйем түгел. Һәм офицер, бойороҡ алғас, уны нисек үтәмәү юлдарын түгел, ә нисек итеп яҡшыраҡ үтәү юлдарын эҙләй. Бында инде: "Мин үтәй алмайым, сөнки...", тигән сәбәп бөтөнләй ҡабул ителмәй. Бойороҡ алғанһың икән, уны үтәргә тейешһең. Шулай уҡ, ҡул аҫтыңда күпме һалдат бар, шуларҙың һәр ҡайһыһының ғүмере өсөн яуаплылыҡ тояһың. Был - иң тәүге бурыс. Сөнки һәр һалдат артында уның ата-әсәһе генә түгел, ә тотош уның донъяһы - уның ғаләме тора. Һин һалдат өсөн генә түгел, ә уның ошо тотош донъяһы өсөн яуаплы. Шуға күрә бойороҡто үтәр алдынан, тәүҙә уны үҙеңә аңлап, һалдаттарға ентекле итеп аңлата белергә кәрәк. Юҡҡа ғына, әгәр ҡоралың бар икән - ярты эшең эшләнгән, тимәйҙәр. Әгәр һалдат үҙенән нимә талап ителгәнен аңлаһа, эсергә һыуы, ашарға ризығы, атырға патрондары булһа - ҡушылғандың яртыһы үтәлде, тигән һүҙ. Әгәр инде уға, "Иди туда - не знаю куда, принеси то, не знаю что", тигән кеүегерәк бойороҡ бирәһең икән, әлбиттә, бойороҡ үтәлмәйәсәк.

Әлеге ваҡытта депутат вазифаһын башҡарам икән, быны ваҡытлыса ғына тип ҡарайым һәм үҙемдең төп принциптарыма тоғро ҡалырға тырышам. Ошо арауыҡта кешелеклелегеңде юғалтһаң, кеше күҙенән төшһәң, үҙең тураһында кире фекер ҡалдырһаң, принциптарыңа хыянат итһәң, депутатлыҡ мөҙәтең үткәс, һайлаусыларың күҙенә нисек ҡарамаҡ кәрәк? Шуға күрә мин депутат булғанда ла кеше булып ҡалырға һәм ошо ваҡытты ветерандар, көс структураларында хеҙмәт итеүселәр мәнфәғәтендә максималь файҙаланырға тейешмен. Ә кемдер өсөн яҡшылыҡ эшләйем тиһең икән, намыҫты һатып, яҡшы булып булмай. Яҡшылыҡ эшләгәндә һинең намыҫың таҙа булырға тейеш. Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә, тип юҡҡа әйтмәгәндәр бит. Өҫтәүенә, хәрби дуҫтарым аңламаясаҡ. Әле Мәскәүҙә булғас, улар менән һирәк осрашам, ә бит кире Өфөгә ҡайтһам, йыш осрашырға тура киләсәк. Әгәр бөгөн намыҫымды һатһам, уларҙың күҙенә нисек тура ҡарармын?

### Депутатлыҡ - сираттағы һынау ғына

Бер ваҡытта ла депутат булырға хыялланманым, хатта уйымда ла булманы. Ҡайҙа ул Дәүләт Думаһы депутаты булыу, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай йәки ҡала советы түгел, ауыл советында депутат булыу тураһында ике ятып бер төшөмә инмәне. Хатта окопта ултырғанда ла һәр ваҡыт депутаттарҙы әрләй, бөтөн нәмәлә уларҙы ғәйепләй торғайным. Хәҙер үҙемде лә шулай әрләйҙәрҙер инде. Бәлки, дөрөҫ тә әрләйҙәрҙер, мин үпкәләмәйем. Әммә 2007 йылда "Берҙәм Рәсәй" партияһының исемлеге буйынса РФ Дәүләт Думаһының бишенсе саҡырылыш депутаты булып үткәс, быны үҙем өсөн сираттағы һынау, тип ҡабул иттем. Һине яҙмыш һынап ҡарай: йә кеше булып ҡалаһың, йә боҙолаһың, йә ерлегеңдән айырылып, тиҙ генә ҡолап төшәһең. Шуға күрә депутат мандатына эйә булғас та үҙемә үҙгәрмәҫкә, кешелекле булып ҡалырға, ауыл малайы икәнемде онотмаҫҡа һәм ауылға мәсет төҙөп ҡуйырға һүҙ бирҙем. Был минең ауылдан айырылмағанлығымды күрһәтеп торған беренсе аҙым булды.

Депутат булдың да эш бөттө түгел, һин ул яуаплылыҡты күтәрә белергә лә тейешһең. Башҡортта бит "елкәһе йоҡаҡ", тигән бер лаҡап бар. Елкәң йоҡаҡ булһа, депутатлыҡ вазифаһын күтәрә лә алмаҫҡа мөмкинһең. Мин шулай тип әйтмәһендәр өсөн тырышам. Бишенсе саҡырылышта Ветерандар эштәре буйынса комитетҡа эләктем һәм улар тураһында хәстәрлек күрә башланым. Ветерандарҙың торлаҡ шарттарын яҡшыртыу, пенсияларын арттырыу, хәрбиҙәргә түләүҙәрҙе күтәреү буйынса бик күп закон проекттары әҙерләнек һәм ҡабул итеүгә өлгәштек. Башҡортостанда Афған һәм Чечен һуғышы ҡорбандарына күп кенә һәйкәлдәр астыҡ.

✓ *Улар беҙгә комитеттарыбыҙ вәкәләтендәге мәсьәләләр буйынса хаттар, мөрәжәғәттәр ебәрһә, урындарҙа ниндәй проблема булыуын белеп торор һәм ошо йүнәлештә эшләр инек. Ә һораусы юҡ икән, тимәк, проблема ла юҡ.*



# АЛЫШТЫРМАМ...

## күңеленә сәйәхәт

Шулай уҡ 1931 йылдың 1 ғинуарынан 1945 йылдың 1 августына тиклем арауыҡта тыуған һуғыш йылдары балаларына ярҙам итеү буйынса закон проекты әҙерләнек, әммә уны ҡабул итеү финанс мәсьәләләренә бәйле тотҡарлана. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына һәм уларҙың тол ҡалған ҡатындарына торлаҡ сертификаттары биреү буйынса закон тулыһынса тормошҡа ашырылып бөтмәйенсә, быныһы ҡабул ителмәҫтер, күрәһең.

Ҡайҙа ғына, ниндәй генә вазифа биләһәң дә, ерҙән, халыҡтан айырылырға ярамай. Халыҡ депутат менән бәйләнешкә сыға алһын өсөн мин һәр саҡ - телевизорҙан сығыш яһағанда ла, гәзит-журналдарға ла телефон номерымды (89174218937) бирәм. Халыҡ өсөн мин һәр саҡ элемтәлә, бәйләнештә, шуға ла ҡабул итеү көндәрендә кеше күп мөрәжәғәт итә. Дүрт айҙың бер аҙнаһын Башҡортостанда, халыҡ менән осрашып, уларҙы ҡабул итеп үткәрәм. Ниндәй генә һорау менән килһәләр ҙә, был минең өлкә түгел, тип кире борғаным юҡ. Депутатлыҡ үҙенә ниндәйҙер өҫтөнлөктәр алыу, тейелгеһеҙлек тәьмин итеү ысулы түгел. Миңә тейелгеһеҙлек бөтөнләй кәрәкмәй. Халыҡтың мөрәжәғәт итеүе мөһимерәк. Сөнки ул миңә эш, уйланырға ем, импульс бирә. Ошо халыҡ менән аралашыуҙар ниндәйҙер закон проекты әҙерләүгә этәргес булһа, уны үткәреүгә өлгәшһәк - депутат өсөн шунан да юғарыраҡ наград юҡ.

Профессиябыҙ буйынса төрлө комитеттарҙа ағза булып торабыҙ һәм мин, ветерандар менән эшләгәс, 2013 йылда, Афғанстандан совет ғәскәрҙәрен сығарыуҙың 25 йыллығы алдынан, Хөкүмәттән афғансыларҙы юбилей миҙалы менән наградлауҙарын һорағайным. Оборона министрлығы әлегә тиклем ошо миҙалдарҙы тапшыра. Льготаларҙы арттырыу, ветерандарҙы федераль йәки төбәктекеләргә бүлмәү, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын ғына түгел, хәрби хәрәкәттәр ветерандарын да торлаҡ менән тәьмин итеү буйынса ла сығыш яһап, маҡсатыбыҙҙы тормошҡа ашырабыҙ. Афған, Чечня һуғыштары ветерандарына 80-90 йәш тулыуҙы көтөргә кәрәкмәй, уларҙы бөгөн үк торлаҡ менән тәьмин итергә кәрәк. Был йәһәттән дә уңыштарыбыҙ бар, тип әйтә алам.

Һәр депутат үҙ йүнәлеше буйынса һайлаусыларының мәнфәғәтен яҡлай, әммә мәсьәләнең икенсе яғы ла бар: беҙ, халыҡ тарафынан һайланып ҡуйылған депутаттар, трибуна артына сығып, ниндәйҙер мәсьәлә күтәреп, уны яҡлау һәм үҙ һүҙебеҙҙе әйтеү өсөн халыҡтың, ойошмаларҙың инициативаһы кәрәк. Улар беҙгә комитеттарыбыҙ вәкәләтендәге мәсьәләләр буйынса хаттар, мөрәжәғәттәр ебәрһә, урындарҙа ниндәй проблема булыуын белеп торор һәм ошо йүнәлештә эшләр инек. Ә һораусы юҡ икән, тимәк, проблема ла юҡ. Депутат та бит шундай уҡ кеше, ул Аллаһы Тәғәлә түгел, һәм һәр бер ауылға барып, ниндәй проблема барлығын белешеп йөрөй алмай.

### Балаңды үҙ өлгөңдә тәрбиәлә

Бер ваҡыт оло аҡһаҡалға бер ауырлы ҡатын килеп, тыуасаҡ балаһын нисек тәрбиәләргә кәрәклеге хаҡында һораша. Аҡһаҡал уның ауырына нисә ай булыуы тураһында һорай, ҡатындың яуабынан һуң, һин тап ошо ваҡытҡа һуңлағанһың инде, тип яуаплай. Шуның кеүек, баланы тыумаҫтан алда, ул яралыу менән үк тәрбиәләй башларға кәрәк. Бының өсөн тәү сиратта үҙең тәрбиәле булырға тейешһең. Ә беҙ, ата-әсәләр, балалар матур йәшәһен тип, эшләйбеҙ ҙә эшләйбеҙ, эштән бушамайбыҙ. Әгәр бала менән шөғөлләнеп, уйнап, китап уҡып ултырырға ваҡытың юҡ икән, уны үҙеңдең өлгөңдә тәрбиәләргә кәрәк.

Бөгөн бала тәрбиәләү үҙе ҙур проблема инде ул. Беҙ үҫкән ваҡытта ата-әсәйҙәргә барыбер ҙә бала тәрбиәләү еңелерәк булғандыр, тием. Сөнки беҙҙе олатай-өләсәйҙәр, оло ағай-апайҙар, мәктәп, ундағы ойошмалар, түңәрәктәр тәрбиәләне. Рухты үҫтерә торған китаптар күп ине, шуларҙы уҡыныҡ, телевизорҙан патриотик рухлы кинолар, спектаклдәр ҡараныҡ. Ә хәҙер ата-әсәгә баланы тәрбиәләүгә ситтән ингән йоғонто - интернет, күп каналлы телевидение, киң мәғлүмәт сараларында булған бысраҡ мәғлүмәт ныҡ ҡамасаулай. Беҙ бала саҡта хеҙмәт аша тәрбиәләндек. Хәҙер балаларҙың эштәре лә юҡ. Хатта ауыл ерендә лә ҡайһы бер ғаиләләр картуф, йәшелсә-емеш үҫтермәй, һатып ала, тигәндәй. Урманға шешлек бешерергә барғанда ла магазиндан һатып алып, әҙер күмер алып баралар. Был ниндәй үлсәүҙәргә һыя икән ул? Керҙе, һауыт-һабаны машина йыуа. Шуға күрә, хәҙер балаларҙы тәрбиәләү элеккегә ҡарағанда ун тапҡырға ауырыраҡ, тиер инем.

Был йәһәттән ата-әсәйҙәребеҙгә көнләшәм. Уларға бит беҙҙе тәрбиәләргә лә кәрәкмәне - тәрбиә өсөн бөтөн шарттар бар ине, уларға бары тик эш ҡушып, уның үтәлешен тикшереп, кисен йоҡларға һалып, иртән йоҡонан уятырға ғына кәрәк булды. Мәктәптә лә яҡшы белем алдыҡ, мал-тыуарҙы ҡарап та, китап уҡып та, спорт менән шөғөлләнеп тә, барыһына ла өлгөрә инек. Хәҙер тормош тиҙ ағамы, бер нәмәгә өлгөрмәйбеҙ. Ғәмәлдә, беҙ балаларҙы күрмәйбеҙ ҙә тиерлек. Улым әсәһенән нимәлер һораған да, унан, "Атайыңдан һора", тигән яуап алғас, "Ул бит йондоҙ кеүек, уға буй етмәҫлек", тип шаяртҡан. Командировканан ҡайтҡас, ҡыҙыма: "Мин ҡайттым", - тигәйнем, "Берәй ергә киткәйнеңме ни?", тип аптырап һорай. Ә мин өс көн өйҙә булманым. Хәйер, өйҙәмен тигәндә лә, иртән китәһең, кисен һуң ҡайтаһың, балалар хатта күрмәй ҙә. Улай тиһәң, беҙ ҙә атай-әсәйҙе күрмәнек инде...

### Ир-егеттең йөрәгендә -тыуған яҡ

Ауылымды бик ныҡ яратам. Әгәр күңелеңдә тыуған ереңә һөйөү хисе юҡ икән, ваҡытлыса йәшәгән урыныңды ла, кешеләрҙе лә яратмаясаҡһың. Һәр ваҡыт ҡайтып йөрөргә тырышам, мәктәпте лә онотмайым, ярҙам итеп торам. Ауылымды, ауылдаштарымды яратҡанға күрә, рәхмәт йөҙөнән, фатирға тип йыйған аҡсама мәсет һалып ҡуйҙым. Сөнки ауылдаштарым һәйбәт булмаһа, минең ата-әсәйем дә һәйбәт булмаҫ ине. Улар һәйбәт булмаһа, мин дә насар булыр инем. Изге йорт бер ваҡытта ла бикләнмәй. Һәм һәр юлсы, унда туҡтап, ял итеп, тамаҡ ялғап, юлын артабан дауам итә ала. Иман йортон ҡарау, тәртиптә тотоу, коммуналь сығымдарҙы түләүҙе туғандарым менән бергәләп атҡарабыҙ. Миңеңсә, кеше намаҙ уҡый белмәһә лә, мәсеткә инеп, аяттар тыңлап, күңелен сафландырып, мәрхүмдәр рухына хәйер һалып булһа ла сығырға тейеш. Сөнки беҙ ата-әсәйҙәребеҙҙе онотһаҡ, балаларыбыҙ беҙҙе онотасаҡ.

Һайран эргәһенән тап-таҙа һыулы Шиҙе йылғаһы аға. Ҡыш көнө ҡойолар туңа, һыуҙы Шиҙенән алып эсәбеҙ. Ауылыбыҙҙа элек леспромхоз булды, атайым шунда участка начальнигы булып эшләне. Һәр ваҡыт эшселәр менән урманға йөрөнө. Беҙ ҙә урманға йөрөп, ағас ултыртып, уны утап, ҡарап, тәрбиәләп үҫтерә торғайныҡ. Хатта телевизор ҡарағанда ла эшһеҙ ултырманыҡ - ҡап һуҡтыҡ, селек һепертке, йүкә бумалалар бәйләнек. Бала саҡтан тәбиғәтте, ер-һыуҙы яратып үҫтек. Мәктәптә уҡығанда йыш ҡына беҙҙе экскурсияға алып бара торғайнылар. Унда япраҡтар, үләндәр йыйып, бөжәктәрҙе күҙәтеп йөрөй инек. Яҙғыһын сыйырсыҡ оялары эшләп, уны урамға ғына түгел, урманға ла алып барып ҡуйҙыҡ. Бесән сапҡанда ла, йәш ағасты киҫмәҫ өсөн, ашыҡмай, ҡарап ҡына саба инек. Тәбиғәтте яратыу шулар аша килгәндер.

Әле лә ҡайтҡан һайын Бикмәш тауына менеп, ыңғай энергия алып китәм. Афғансыларҙы, хәрби дуҫтарҙы ер кендеге булған Торатауға алып менергә тигән хыял менән йәшәйем. Беренсенән, был сәләмәт тормошто пропагандалай, икенсенән, Торатау Башҡортостан мөғжизәләренең береһе булып тора, һәм уны яратырға, һаҡларға, килер быуындарға аманат итеп тапшырырға кәрәк. Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы уңайынан шундай акция ойошторорбоҙ, тип ниәтләйем.

### Донъяға йылмайып баҡһаң, ул һиңә йылмайыр

Һуңғы ваҡытта кешелә ниндәйҙер ышанмаусылыҡ бармы ул, һирәк йылмаялар, йәмәғәт транспортында ла үҙ уйҙарына күмелеп баралар. Тормош ауыр тиһәк тә, ауылдарҙа ла, ҡалаларҙа ла яңы өйҙәр төҙөлә, шәхси автомобилдәр һаны арта. Нисек кенә зарланмаһын, халыҡ яҡшы йәшәй. Ә нәфсе тигәнең, күрәһең, булған һайын күберәкте көҫәй. Хәҡиҡәт сағыштырыуҙа табыла, тигәндәй, 1998 йылғы көрсөк алдынан халыҡ шырпы, тоҙ, сәй, он, ярма алып ҡалырға тырышһа, әле Яңы йыл алдынан машина, заманса техникаға ябырылды. 15 йылда барыбер ниндәй ҙә булһа алға китеш бар. Донъя малы артынан ҡыуып, вазифалы урын биләйбеҙ тип, кешеләр бер-береһенә уҫал итеп, бүре кеүек ҡарамаһын ине. Шундай күренештәрҙе күрәм дә, һуғышта һәләк булған, тыныс тормошта ғүмерҙәре өҙөлгән егеттәрҙе иҫләйем. Уларға бит ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп, ата-әсәһен шатландырып йәшәргә лә йәшәргә ине, тип уйлайым. Ә улар юҡ... Шуға күрә тормоштоң, ғүмерҙең һәр бер минутының ҡәҙерен белеп, бер-беребеҙҙе, халыҡты, кешеләрҙе яратып, бер-беребеҙгә ярҙам итеп, йылмайып, шатланып йәшәйек!



***Ауылымды бик ныҡ яратам. Әгәр күңелеңдә тыуған ереңә һөйөү хисе юҡ икән, ваҡытлыса йәшәгән урыныңды ла, кешеләрҙе лә яратмаясаҡһың. Һәр ваҡыт ҡайтып йөрөргә тырышам, мәктәпте лә онотмайым, ярҙам итеп торам. Ауылымды, ауылдаштарымды яратҡанға күрә, рәхмәт йөҙөнән, фатирға тип йыйған аҡсама мәсет һалып ҡуйҙым. Сөнки ауылдаштарым һәйбәт булмаһа, минең ата-әсәйем дә һәйбәт булмаҫ ине. Улар һәйбәт булмаһа, мин дә насар булыр инем. Изге йорт бер ваҡытта ла бикләнмәй. Һәм һәр юлсы, унда туҡтап, ял итеп, тамаҡ ялғап, юлын артабан дауам итә ала. Иман йортон ҡарау, тәртиптә тотоу, коммуналь сығымдарҙы түләүҙе туғандарым менән бергәләп атҡарабыҙ. Миңеңсә, кеше намаҙ уҡый белмәһә лә, мәсеткә инеп, аяттар тыңлап, күңелен сафландырып, мәрхүмдәр рухына хәйер һалып булһа ла сығырға тейеш.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кеше ни тиклем юғарыраҡ вазифа биләй, ул шул тиклем ябайыраҡ була, тиҙәр. Был, моғайын да, һәр кемгә тап килмәйҙер. Әммә Ишембай районының Һайран ауылынан сыҡҡан ир-азамат Иршат Фәхретдиновтың бар асылы ошо ябайлыҡталыр, күрәһең. Ә уның сере лә бик ябай: үҙеңә, принциптарыңа, офицер намыҫына тоғро ҡалыуҙа, тыуған ереңде, кешеләрҙе, иң мөһиме - тормошто яратыуҙа.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

✓ ***Аңғармай ҙа ҡалдыҡ, апайым Муллағәле ҡоҙаны күтәреп алып, ҡар өҫтөнә бәрҙе! Халыҡ шау-гөр килеп көлә, ә бисә кешенән еңелгән ҡоҙа, майкаһына тиклем сисеп быраҡтырҙы ла: "Давай, яңынан көрәшәбеҙ!" - ти.***









Ярһыған ҡатын Ишбулаттан аҡланыу һүҙҙәре көткәйне, ул бөтәһен дә инҡар итә башлар, бар ғәйепте һөйәркәһенә япһарыр, тип уйлағайны. Бер аҙҙан ғәйебен танып, ғәфү үтенер, гонаһын ярлыҡауҙы һорар, тип өмөтләнгәйне. Бындай осраҡта, бәлки, сатнаған тормоштары кире ялғанып та китер ине - ҡатын-ҡыҙ йәне иреүсән, булмышы кисереүсән бит ул. Ләкин Ишбулат ҡаршы бер һүҙ ҙә өндәшмәне - күрәһең, тәтәй һөйәркәнең матурлығынан ҡамашып, күңел күҙе һуҡырайғайны. Икенсенән, дөрөҫ һүҙгә ни тип кенә яуап ҡайтарһын инде? Ул өн-тынһыҙ урынынан торҙо ла, иң кәрәкле әйберҙәрен ҙур ғына сумкаға тултырып алып, һаубуллашып та тормайынса өйҙән сығып китте...

Шулай ҙа, Ғәйшәнең күңел төбөндәге йәшерен теләге ҡабул булды - күрәһең, ул фәрештәнең "амин" тигән сағына тура килгәйне. Бер йыл элек һөйәркәһен ҡултыҡлап, әллә кем булып БАМ төҙөлөшөнә юлланған Ишбулат көндәрҙән бер көндө бахыр ғына ҡиәфәттә беренсе ҡатыны алдына килеп башын эйҙе:

- Ғәфү ит инде мине, Ғәйшә! Ныҡ яңылыштым - һин дөрөҫ әйткәнһең. Нишләтһәң дә ризамын, тик ҡыума ғына! Башҡаса сит ҡатын-ҡыҙға әйләнеп тә ҡарамаясаҡмын. Билләһи!..

- Юҡ инде, ҡушағам! - тип уны бүлдерҙе Ғәйшә. - Бер алданғаным да еткән. Ә-ә, яңылышҡаныңды яңы аңланыңмы ни? Тормошобоҙҙо үҙең боҙҙоң, яҙмышыңды үҙең һайланың. Инде хәҙер мин нимәгә кәрәк - һинең ҡурсаҡ кеүек бисәң бар бит...

- Юҡ шул, - тине Ишбулат бошонҡо ғына итеп, - ташланы ул мине, бер урыҫ егете менән ҡасып китте.

Бер йыл эсендә танымаҫлыҡ булып уҫалланған Ғәйшә асыҡтан-асыҡ мыҫҡыллауға күсте:

- Ай-яй-яй!.. Ҡалай әрәм булған, йә инде! И-и, меҫкен, шундай һәйбәт бисәнән ҡолаҡ ҡаҡҡас, зар илағанһыңдыр инде...

- Ярай, көлмә, йәме...

- Ә ниңә? - тип дауам итте Ғәйшә. - Ысынлап та, дан бисә икән - һине, ҡарт ишәкте шартына килтереп уҡытҡан бит! Ҡалай ғына йәтеш иткән! Мин маҡтайым уны. Хатта уға хөрмәтем артып китте. Башҡаса осратып булмаҫ инде, күрһәм, рәхмәт йөҙөнән күлдәк кейҙерер инем шул Файкаға.

- Һинең алдыңда ғәйебем ҙур, Ғәйшә. Шайтан ҡоторттo. Ана, атта дүрт аяҡ, ул да һөрөнөп китә. Улыбыҙ хаҡына кисер, зинһар.

- Аһ-аһ!.. Балаһы бар икәне иҫенә төшкән берәүҙең! Ай, афарин, Файка - көлкөңдө генә түгел, хәтереңде лә яңыртҡан!

- Зинһар ярлыҡа. Теләйһеңме, алдыңда тубыҡланам.

- Юҡ! Теҙләнеү түгел, имгәкләһәң дә ярлыҡау булмаясаҡ!..

Шулай ҡырт киҫте Ғәйшә. Ғорурлығына баш була алмайынса, ҡаты бәғерлелек күрһәтте. Ә бит ваҡытында унан да нескә, йомшаҡ күңелле кеше юҡ ине. Ғәйшәнең йөрәге хыянат тыуҙырған ғәрлек һәм кәмһенеү уттарында янып-көйҙө, айырылышыу ғазаптарынан һыҙланы, һағыштарынан һарғайып кипте. Ҡасандыр саф булған һөйөү хистәрен көнө-төнө түгелгән әсе күҙ йәштәре йыуып төшөрҙө. Улар урынына йәндә нәфрәт тойғолары хасил булды. Ә нәфрәт күңелде ҡатыра ғына...

Бынан һуң ярты йыл үткәс, Ғәйшәнең берҙән-бер йыуаныҫы һәм терәге булған Ишморат әрме хеҙмәтенә алынды. Әсә улын Ҡыҙылға тиклем оҙата барҙы. Район үҙәгендәге хәрби комиссариат алды хеҙмәткә алынған егеттәрҙе оҙатыусылар менән тулы. Хушлашыу мәлендә генә була торған төрлө ауаздарҙан майҙан гөж килә. Бер нисә урында ойошторолған түңәрәк эсендә өҙҙөрөп гармун тарталар, бейейҙәр. Ана, ситтәрәк урта йәштәрҙәге ата менән әсә рюкзак аҫҡан улдарына кемуҙарҙан кәңәш-теләктәрен әйтә, икенсе яҡта буласаҡ һалдат үҙенең һөйгән ҡыҙы менән хушлаша. Бер һүҙ менән әйткәндә, оло баҙар, кесе йәрминкә!

Һаубуллашыу ваҡытында бар көсөнә күтәренке күңелле булырға тырышҡан Ишморат шулай ҙа түҙмәне - майҙанда шау-гөр килгән халыҡ төркөмөнә бер килке ҡарап торғандан һуң, күңелен өйкәгән тойғоһон белдерҙе:

- Их, әсәй, юҡҡа ғына индермәнең атайҙы! Исмаһам, мине лә икәүләп оҙатыр инегеҙ...

Ишмораттың был хыялы тормошҡа ашты - күрәһең, ул саф йөрәктән ихлас әйтелгәйне. Эйе, Ишбулат менән Ғәйшә берҙән-бер улдарын икәүләп оҙаттылар. Тик был әрме хеҙмәтенән тутыя табутта ҡайтҡан һалдаттың һуңғы юлы ине.

Фажиғә тураһындағы тетрәткес хәбәр ғүмерҙә күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән Афғанстандан килде. Ул ишетелгәндә ҡара көҙ ине. Хәбәр артынса, яҙ көнө генә әрмегә киткән Ишморат тыуған йортона инеп ятты. Дөрөҫөрәге, хәрби кейемдәге өс-дүрт кеше уның тутыя табуттағы кәүҙәһен ҡайғынан ҡара көйгән Ғәйшәнең өйөнә индереп һалды. Я, Раббы! Өнмө был, әллә төш кенәме?.. Өндөр, ахырыһы - төш улай уҡ ҡурҡыныс булмаҫ. Атаҡ, ни һөйләйҙәр ул? Имеш, уның улы ниндәйҙер интернациональ бурыс үтәгәндә батырҙарса һәләк булған?!. Һуң, ул бит әрмегә үлергә түгел, ә хеҙмәт итергә киткәйне. Ишморатмы был? Әгәр ул булһа, нишләп табутты астырмайҙар, йөҙөн күрһәтмәйҙәр? Бәлки, был бөтөнләй Ғәйшәнең улы түгелдер? Бынау хәрбиҙәр нимәнелер бутап, яңылышып йөрөмәйҙәр микән? Ысынлап та, был Ишморат түгел шикелле. Әгәр шулай булмаһа, уны Башҡортостанға алып ҡайтып, мосолман зыяратына ерләргә рөхсәт итерҙәр ине. Имеш, һалдат ҡайҙан саҡырылған хәрби хеҙмәткә, шунда ер ҡуйынына тапшырылырға тейеш.

Ишморатты һуңғы юлға бөтә ҡасаба оҙатышты, тиһәң дә була. Йәненә иҫ киткес ауыр ҡайғы ишелеүҙән, Ғәйшә бер нисә мәртәбә иҫен юғалтты. Өҫтөнә күк көмбәҙен ҡаплап алған ҡуңыр болоттар түңкәрелде, донъя төпһөҙ ҡараңғылыҡҡа сумды тигәндә, уны уколдар ҡаҙап әсе ысынбарлыҡҡа ҡайтарҙылар. Аһ, ниңә уны көсләп бынау ғазаплы донъяға кире тартып алалар!.. Инде тормоштоң ни мәғәнәһе? Ғәйшәгә бит был донъяға ҡарағанда, улы юлланған теге донъя ҡәҙерлерәк!..

Иҫе үңгәләгән Ғәйшә ул ҡәһәрле көндәге ваҡиғаларҙы урыҡ-һурыҡ булып үткән мәхшәр төҫлө генә хәтерләй. Унда, бер-береһен алмаштырып, ниҙҙер һөйләнеләр, бер нисә тапҡыр мылтыҡтан аттылар. Кемдәрҙер иланы, ҡайһы бер кешеләр уны ҡосаҡланы, ҡайғыһын уртаҡлашты. Бәй, Ишбулат та бында, имеш. Уға ла ҡыйындыр - улы бит. Ҡыҙыҡ, ҡайҙан ишетте икән? Хәйер, уға аптырайһы түгел - ана бит, төрлө ерҙән күпме халыҡ йыйылған. Ләкин Ишморат был донъяла инде булмағас, уның урынына бер өйөм ҡара тупраҡ ҡына тороп ҡалғас, был һүҙҙәрҙең, ул ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеүҙәрҙең ни мәғәнәһе? Улар кемгә кәрәк? Кемгә? Кемгә?..

Хәтирәләренең мәңге уңалмаҫ яралай әрнеп торған ошо тәңгәленә килеп еткәс, Ғәйшә әбей айнып киткәндәй булды. Әйтерһең, нисәмә йылдар буйы һулҡып, үҙен әленән-әле һиҙҙертеп торған йәрәхәт уны һиҫкәндереп, ысынбарлыҡҡа ҡайтарҙы. Туҡта, нишләп ултыра әле ул? Хат яҙа. Кемгә? Күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән сит-ят бер кешегә. Әйтмәксе лә, ә уға кәрәкме был хат? Ғәлләм Болғари Ғәйшә әбейҙең хатына ла, үҙенә лә мохтажлыҡ кисереүе бик икеле. Уның баяғы календары баҫылып сыҡмаҫ борон булһа, бер хәл. Унда ла, дини яҡтан өйрәнсек бер ҡарсыҡтың төпкөлдән яҙған хатын ҡолағына әллә элер ине, әллә юҡ. Дин өйрәтеүенсә, хатта һәр төрлө кәмселектәрҙән азат булған Аллаһы Тәғәлә һис бер йәнгә мохтажлыҡ кисермәй. Киреһенсә, ике донъяны бар ҡылыусы ғаләмдәр хужаһына үҙе мохтажлыҡ кисерә бәндә. Уҡымышлы булыуына ҡарамаҫтан, үҙе Алланың бер ҡоло булған кешегә Ғәйшә әбейҙең хаты нимәгә хәжәт? Бигерәк тә, уның яҙғанына ризаһыҙлыҡ ғәләмәте. Ҡыҙыулыҡ менән яҙа башлаған хатты дауам итеүҙең мәғәнәһе ҡалманы. Ғәйшә әбейҙең изге ниәттән тоҡанған теләге һүрелде. Уның күңелендә бары тик үкенеү менән ғәрлек араһындараҡ торған әсе тойғо ҡалды. Ғәҙәттә, кемгәлер үҙеңдең хәлеңде аңлатырға йыйынып та, тыйылырға мәжбүр булғанда күкрәктә ошондай хистәр ҡайнаша. Ярай, уныһы ла баҫылыр әле - тормоштоң ғазаптарын үткәреп өйрәнгән баш. Сабырлыҡ кәрәк. Әлбиттә, тел һөйәкһеҙ - ни әйтмәҫ тә, ни һөйләмәҫ. Уға ҡалһа, Ғәйшә әбейҙең әйтер һүҙе юҡмы ни? Ул күргәнде күрһә, Ғәлләм Болғари анау һөйләмде яҙырға ҡыймаҫ ине, моғайын. Ә әйтәһе һүҙҙәргә килгәндә, Ғәйшә әбейҙең күңелендә улар бихисап. Уның күргән-кисергәндәрен бәйнә-бәйнә яҙа башлаһаң, хатҡа түгел, китапҡа һыймаҫ ине. Мәҫәлән, улының фажиғәһенән аҙаҡ ауырып аяҡтан йығылыуы, оҙаҡ ваҡыт дауаханала ятыуы, йәненең үлем менән йәшәү араһында өҙгөләнеүе, донъянан төңөлөр дәрәжәгә етеп өмөтһеҙлеккә биреләүе. Ахыр сиктә тыуған ауылға ҡайтып, күптән мәрхүмә булған әсәһенең өйөнә килеп йығылыу. Ә яңғыҙлыҡтың йоҡоһоҙ төндәрендә, толҡаһыҙ көндәрендә яралған уйҙар һуң? Уларҙы яҙыр өсөн диңгеҙ һыуынан ҡара иҙһәң, ул да етмәй ҡалыр ине. Ихтимал, Ғәйшә әбей үҙенең бөтә ғүмер юлын берәй саҡ хәтирә рәүешендә яҙып ҡалдырыр. Береһен дә йәшермәйенсә барлыҡ һөйөнөстәре менән көйөнөстәре, күҙ асып йомғансы йәшнәгән йәшендәй ҡыҫҡа рәхәттәре менән оҙон-оҙаҡ күкрәгән күктәй дауамлы хәсрәттәре мөлдөрәмә тулы тормошон тасуирлар. Әлбиттә, унан иҫтәлек һәм аманат итеп бағышлар нәҫел ҡалмай, шулай ҙа был күңел йәдкәренең киләсәк быуындар өсөн ғибрәт вә фәһем булыуы бар.

**(Аҙағы. Башы 6-8-се һандарҙа).**

*ШАҢДАУ*

# БАТЫР ҮЛЕМЕ - БИСӘНӘНМЕ?

**Гәзитебеҙҙең 7-се һанында "Башҡорттар ҡар өҫтөндә көрәшкәнме?" тигән мәҡәләне уҡығас, күптәнге бер ҡыҙыҡлы ваҡиға хәтергә төштө лә, шуны һеҙгә лә бәйән итергә булдым.**

1973 йылдың ғинуар айы. Тынды ҡурып торған сатнама һыуыҡ. Атайымдың өйөндә туй гөрләй, ҡыҙын, йәғни мине кейәүгә бирәләр. Бына бер мәл ишек алдында көрәш башланып китте, ҡар борҡотоп көрәшәләр. Борондан ҡалған йола буйынса, һебәгә һәм тирегә көрәшәләр. Һебә - билдәмә, һарыҡ итенең бил өлөшө, иң һимеҙ киҫәге, ә туй тәкәһенең тиреһе - ҙур бүләк, тун тектереү өсөн инде. Ҡатын-ҡыҙҙар- ҡоҙасалар күтәрмәгә баҫып һамаҡлайҙар:

*Ҡоҙаларҙың туйлығын*
*Элеп ҡуйҙыҡ келәгә,*
*Беште инде туй тәкәһе,*
*Көрәшегеҙ һебәгә!*

*Алышалар, айпашалар*
*Ҡоҙаларҙың һереһе,*
*Ныҡ айпашығыҙ ҡоҙалар*
*Еңеүсегә - тиреһе!*

Көрәш ҡыҙғандан-ҡыҙа бара, майҙанға сығырға әҙерләнгән батырҙар ҙа күбәйә бара. Бына бер мәл майҙанда бар көрәшселәрҙе лә еңгән Муллағәле ҡоҙа ғына тороп ҡалды. "Йә, кемегеҙ сыға көрәшергә, әйҙәгеҙ, әйҙә!" - тип түңәрәкте әйләнеп йөрөй был. Ул һабантуйҙарҙа көрәшеп, призлы урындар алып йөрөгән кеше, көрәштең рәтен белә, шуғалырмы, бер кем дә уға ҡаршы сығырға баҙнат итмәй. Ә теге һаман көрәшергә иптәш эҙләй. Бына бер мәл уның янына Фәриҙә апайым сығып баҫты: "Әйҙә, ҡоҙа, мин көрәшәм!" - ти был. Беҙ аптырап ҡалдыҡ, шаярта, тип торабыҙ. Муллағәле ҡоҙа ла: "Юҡ, мин бисәләр менән көрәшмәйем", - ти. Ә апайым: "Көрәшер инең дә, еңелеүеңдән ҡурҡаһың, бисә булһам да, Ғаззали бәһлеүән ҡыҙы бит әле мин!" - тигәйне, теге айбарланып килеп апайымдың биленән таҫтамалын уратып алды. Арьяғы күҙ асып йомған арала булды - аңғармай ҙа ҡалдыҡ, апайым Муллағәле ҡоҙаны күтәреп алып, ҡар өҫтөнә бәрҙе! Халыҡ шау-гөр килеп көлә, ә бисә кешенән еңелгән ҡоҙа ғәрлегенән ҡыҙарынып-бүртенеп, майкаһына тиклем сисеп быраҡтырҙы ла: "Давай, яңынан көрәшәбеҙ!" - ти. Ә апайым: "Еңелгән - көрәшкә туймаҫ!" - тине лә өйгә инде лә китте. Ярһыған ҡоҙа, ҡайтам, тип, атын егә башланы, көскә тынысландырҙылар. "Батыр үлеме - бисәнән" тип шуға әйткәндер инде халыҡ.

**Фәриғә КҮСӘКОВА.**
**Хәйбулла районы Таштуғай ауылы.**

✓ *Әлбиттә, беҙҙәге, Башҡортостандағы, тотош Рәсәйҙәге кешеләр матурыраҡ. Ә инде халыҡ шулай йылмайып та йөрөһә, тағы ла матурыраҡ булыр ине.*



СӘЙӘХӘТНАМӘ

**Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил БИКБАЕВ күптән түгел Америкаға барып ҡайтты. Ошо көндәрҙә Башҡортостан Яҙыусылар берлегендә ҡәләмдәштәренә һәм уҡыусыларына сәйәхәт тәьҫораттары тураһында һөйләне, Америкала яҙылған бер шәлкем шиғырҙарын уҡыны. Гәзит уҡыусы иғтибарына Рауил Төхвәт улы сығышынан өҙөк тәҡдим итәбеҙ.**

# ЮЛБАШСЫҺЫ ТИК ҺҮРӘТТӘ ҠАЛҒАН...

–Америкаға икенсе сәйәхәтем был. Тәүгеһенә 1997 йылдың апрель аҙағында Азия яҙыусыларының Вашингтонда үткән оло йыйынында ҡатнашҡан саҡта юлланғайным. Сараға 33 илдән 300-ләп яҙыусы саҡырылғайны. Улар араһында байтаҡ таныштарымды күреп ҡыуанғайным. Азия яҙыусылары йыйынында беҙ ижад, фекер мөхитендә йәшәнек. Ул саҡтағы юлъяҙмаларым "Вашингтонда ла булдыҡ беҙ, Мәскәүҙе лә күрҙек беҙ" тигән исем аҫтында "Ағиҙел"дә баҫылып сыҡты, аҙаҡ китаптарыма ла инде.

Был юлы сәйәхәтем бөтөнләй башҡа төрлө булды. Былтыр июнь айында Рәсәйҙән бер генә кеше отоп алған грант ярҙамында Америкаға бер йылға уҡырға киткән иҡтисадсы ейәнебеҙ Артурҙы һәм уның ғаиләһен, айырыуса Аҫҡар бүләбеҙ менән Әсил бүләсәребеҙҙе күрер өсөн юлландыҡ Америкаға ҡатыным менән һәм унда 28 ноябрҙән алып 26 декабргәсә сәйәхәт иттек. Артур Мичиган штатының баш ҡалаһы Лансинг ҡалаһында урынлашҡан Мичиган университетында белем ала. Ҙур ғына ҡаласыҡ майҙанын биләгән, 48 меңгә яҡын студент уҡыған Мичиган университеты Лансинг ҡалаһын тотоп тора - 10 мең кешене эш менән тәьмин итә. 48 мең студенттың яртыһы сит илдән килгән. Беҙ ейәнебеҙ белем алған ошо уҡыу йортон ҡарап сыҡтыҡ. Ҙур китапханаға ла иркен генә үтә алдыҡ.

Студенттар йәшәгән ҡаласыҡ элек хәрби ҡала булған, унан һуң Мичиган университетына биргәндәр. Ике ҡатлы бер төрлө корпустарҙың һәр береһендә унлап фатир бар. Артурҙарҙың фатиры бер йорттоң беренсе ҡатында урынлашҡан. Унда ике бәләкәй генә йоҡо бүлмәһе, зал кеүек бүлмәһе бар. Дөйөм алғанда, һәйбәт кенә йәшәйҙәр. Ҡаласыҡ урынлашҡан урын да тыныс - тейендәре, боландары йәшәгән ыҡсым ғына урман буйы.

Лансингта күп ҡатлы йорттар ул тиклем күп түгел, тәбиғәтте лә бик матур һаҡлағандар. Вашингтондағы Капитолийға оҡшатып, үҙҙәренсә Капитолий ҙа төҙөгәндәр. Беҙ уның эсенә лә индек. Рәсәйҙәгеләрҙән айырмалы рәүештә, бындағы полиция хеҙмәткәрҙәренең һәр кемде йылмайып ҡаршы алыуы, беҙҙең бүләбеҙ менән бүләсәребеҙгә балалар китаптары бүләк итеүе ғәжәп күренде. Тағы шуныһы ҡыҙыҡ тойолдо - Капитолий эргәһендәге парковкала һәр депутаттың үҙенә генә тәғәйенләнгән автомобиль урыны бар. Автомобилде ҡайҙа етте, шунда ҡалдырмайҙар икән. Һәр ерҙә - тәртип, һәр ерҙә зауыҡ хөкөм һөрә.

Ейәнем: "Әйҙә, ҡартатай, Чикаго ҡалаһына барып киләйек. Унда күккә олғашҡан йорттар күп", - тигәс, Лансингтан 400 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Чикагоға барып килергә булдыҡ. Юлға сығыр алдынан ейәнемдән: "Беҙ үтәһе юл буйында берәй резервация урынлашмағанмы, интернеттан шуны ҡара әле", - тип һораным. Ысынлап та, оло юлдан 50 саҡрымға эскә боролоп керһәң, индеецтар йәшәгән резервация бар икән. Юл ыңғайы беҙ ошо резервацияға һуғылдыҡ. Күрәбеҙ: бейек тимер бағаналарға матур итеп байраҡтар элгәндәр. Улар юғарыла елберҙәп тора. Административ үҙәктәрендә беҙҙе бер аҫаба ҡатын ҡаршы алды. Быялалар эсендә сувенирҙар урынлаштырылған, түрҙә ҡырыҫ йөҙлө юлбашсыларының һүрәте ҡуйылған. Ейәнем тәржемәһе ярҙамында индеец ҡатын менән аралашып алдыҡ. "Мәктәбегеҙҙә уҡытыу ниндәй телдә алып барыла?" - тигән һорау биргәйнем, ул: "Инглиз телендә", - тип яуап бирҙе. Артабан: "Милли матбуғатығыҙ бармы?" - тип ҡыҙыҡһындым. Әңгәмәсем: "Матбуғатыбыҙ юҡ", - тине. "Ғаиләлә туған телегеҙҙә аралашаһығыҙмы?" - тиеүемә: "Туған телде ололар ғына белә, тигәндә лә була. Ғаиләләрҙә башлыса инглиз телендә аралашалар", - тип яуап бирҙе. Ошо осрашыуҙан һуң "Резервация" тигән шиғыр яҙҙым:

*Тамырҙары тарих һөйләрме, тип,*
*Битем ҡуйҙым олпат пальмаға.*
*Боронғоноң моңон хәтерләрлек*
*Пальмалар ҙа инде ҡалмаған.*

*Байраҡтарын ғына елберҙәтә*
*Резервация - сәйер акция.*
*Тарихҡа ул иң арзан хаҡ ҡуя,*
*Бысаҡһыҙ ҙа һуя, рухты ҡыя,*
*Туған телде мәкер оҫта тыя,*
*Шәжәрәне йәштәр саҡ тоя.*

*Улар күптән башҡа телгә күскән,*
*Юҡ үҙ матбуғаты, мәктәбе.*
*Онталған, йотолған, онотолған*
*Тыуған моңдар йәме, тел тәме.*

*Ике ҡитғала ла ҡырылғандар*
*Ирокездар, инктар, майялар.*
*Ер өҫтөндә йәшәр ерҙәр бөтә,*
*Ер өҫтөнән ер аҫтына китә -*
*Күпме ырыуҙарҙы гүр ялмай.*
*Һаҡлай алмай хатта юлбашсылар,*
*Булһалар ҙа мәғрүр ҡаялай.*

*Ир-егеттәр ҡомһоҙ илбаҫарға*
*Яуҙырһа ла уҡлы уттарҙы,*
*Иң мәргәндәр атҡан утлы уҡтар*
*Еңерлекме утлы туптарҙы?*

*Бер ҡатлылыҡ инде бөлдөрөр, тип,*
*Аҙмы ни һуң тарих киҫәтте?*
*Нисек тапшырайым ацтектарға*
*Сәләмдәрен башҡорт-истәктең?*

*Мин белмәгән бер бәһлеүән ағас*
*Шыбырланы кеүек эргәлә:*
*-Вигвамдарҙы уттар ялмағанда*
*Янманымы һеҙҙең тирмәләр?*
*Был яҙмыштар нисек шулай оҡшаш -*
*Тарихтарҙы нығыраҡ хәтерлә...*
*Тарих битен күпме аҡтарһаң да,*
*Хәтәр һүҙҙәр биттәр әйтерҙәр.*

*Баш эймәгән башҡорт - баш күтәргән,*
*Дер һелкеткән Рәсәй батшалығын.*
*Уралҡайҙың һирәк һил сағы.*
*Башҡорт өсөн һөргөн булған ерҙәр*
*Иңләһә лә ике ҡитғаны,*
*Ирек даулап, ҡупҡан ил тағы.*

*Уйлағанмы халҡым ере, ирке*
*Ҡыҫылғандан-ҡыҫыла барыр, тип?*
*Резервация-һөргөн бер башҡортто*
*Хафаларға шулай һалыр, тип?*

*Уйлағанмы халҡым, ерен һаҡлап,*
*Етербеҙ, тип, бөгөн был көнгә?*
*Күпме башҡорт, донъя көтәбеҙ, тип,*
*Себерҙәргә китә һөргөнгә!*

*Башҡортостан! Алыҫтарҙан һине*
*Өҙөлөп һағынғаным мең ҡабат.*
*Тигеҙ елпһен, киләсәккә илтһен*
*Уҙған менән бөгөн - пар ҡанат!*

*Ниндәй сәйер акция - резервация,*
*Шомдар артты һине күреүҙән.*
*Юлбашсыһы тик һүрәттә ҡалған,*
*Буш байраҡтар ғына елберҙәй...*

Чикаго - бик ҡеүәтле, ҙур ҡала. Ул хаҡта В. Маяковский "Моё открытие Америки" тигән юлъяҙмаларында 20-се йылдарҙа уҡ яҙған. Нью-Йорк менән Чикагола беренсе небоскребтар барлыҡҡа килгән. Бында 500 метрҙан ашыу бейеклектәге Америкалағы иң бейек йорт урынлашҡан. Ейәндәрем тиҙ йөрөүсе лифт менән уның башына ла менде. Чикаго - күккә ашҡан йорттар ҡалаһы. Улар йөҙ йылдан ашыу тора. Уларҙы төҙөүгә, ҡарауға бик ҙур көс һалынғандыр, алдынғы технологиялар ҡулланылғандыр, тип уйлап ҡуйҙым. Семирамида баҡсалары - бер мөғжизә, пирамидалар - тағы бер мөғжизә булған кеүек, күп ҡатлы йорттар ҙа - бөгөнгө кешенең күҙ алдында эшләнгән бер мөғжизәләр, тип ҡарап йөрөнөм.

13 декабрь көндө тағы бер сәйәхәт ҡылдыҡ. Был юлы ҡуртымға алынған иҫке генә "Тойота" машинаһына ултырып, Канада сигенә яҡын ғына урынлашҡан Мичигандан - Американың иң төньяғынан иң көньяғына - Флорида штатындағы Майами ҡалаһына сығып киттек. Беренсе көндө 1350 саҡрым юл үттек. Юлдары иҫ киткес шәп: дүртәр, бишәр һыҙатлы. Ҡаршы юл ҡайһы ваҡыт беҙҙең юл эргәһенән, ә ҡайһы ваҡыт - бөтөнләй беҙгә күренмәгән ерҙән - ситтән үтә. Атланта тигән ҡалала туҡталып, төндө шундағы ҡунаҡханала үткәрҙек. Иртәнге аштан һуң ары ҡуҙғалдыҡ. Йәнә мең саҡрымдан ашыу юл үттек. Һанап ҡарағайныҡ, ике көндә бөтәһе 2500 саҡрым юл үтелгән. Хәҙер иҫәпләп ҡараһаң, бер көндә генә үткәне - Силәбенән Мәскәү аша Смоленскиға барып етеүгә тиң булған икән...

Майами - Американың иң көньяғындағы ҡала. Кубаға ла йыраҡ түгел - 150-ләп саҡрымда ята. Ҡояшлы ҡалала "Нью-Йоркер" тип аталған ҡунаҡханаға урынлаштыҡ. Майамиҙа күп ҡатлы йорттар ҙа, бер ҡатлы йорттарҙан торған урамдар ҙа бар. Күп ерҙәрҙе үҙебеҙҙең Ырымбур яҡтарына, Ырымбурҙың бер ҡатлы йортло урамдарына оҡшаттым. Артурҙар Бәләкәй Гавана тигән районда ике яҡлы йортта торҙо, бер яғында - улар, икенсе яғында - икенсе ғаилә. Бәләкәй Гаванала күбеһе испан телле халыҡ йәшәй. Ғөмүмән, Майамиҙа испан теле бик ныҡ таралған. Ҡалала йәшәүселәрҙең 72 проценты - төҫө буйынса Европалы халыҡ, 19 процент - афро-американлылар (унда "негр" тип әйтергә ярамай. Уның өсөн ултыртып ҡуялар йәки штраф түләтәләр). Ни өсөн испан телендә генә һөйләшәләр, тиһәгеҙ, бында элек Мексика ерҙәре булған. Ҡоллоҡтоң иң ныҡ үҫешкән урыны - шул көньяҡ штаттар икән. Литл-Гавана буйлап китеп барһаҡ, бер урында "Куба" тип яҙып ҡуйылған бер стенд тора. Артур: "Әйҙә, ҡартатай, фотоға төшәйек", - ти. Мин әйтәм: "Юҡ, төшмәйем. Был минең Куба түгел, ҡасып килгән халыҡтың "Кубаһы", - тим. Ысынлап та, унда йәшәгән халыҡтың күбеһен ҡасып килгән эмигранттар тәшкил итә.

Ейәндәрем туңдырма һатып алып килергә, тип киткәнсе, мин эргәләге йәйге кафе янында ултырып торҙом. Йәйге япма аҫтында ирҙәр шарт та шорт килеп, домино һуғалар, шашка уйнайҙар. Көйәрмәндәре лә бар - улары ҡысҡырып ебәрә, шаулаша. Ҡыҙмаса кешеләр ҙә күренгеләп ҡала. Һәр кеше үҙенсә ҡыҙыҡлы. Күрәһең, был кешеләр Кубанан ҡасып килгән, йәки унан элегерәк киткән кешеләрҙер, бер-береһен белгән кешеләргә оҡшайҙар. Шаулашып, шаҡ та шоҡ домино һуҡҡан ошо кешеләргә ҡарап, мин: "Кубалар барыбер американлыға әйләнмәгән икән", - тип уйлап ҡуйҙым. Сөнки ысын американлы шаҡ та шоҡ килеп домино һуғып ултырмаҫ. Ул ваҡытын ҡәҙерләй...

Майамиҙың иң иҫтә ҡалған урыны, әлбиттә, океан. Ғүмерҙә лә океанда булғаным юҡ ине. Артур менән килен алдан йүгерҙе, Фәриҙә менән икебеҙ бүләбеҙ менән бүләсәребеҙҙе коляскаға ултыртып алып, эре генә арттан эйәрҙек. Беҙҙе күргән кешеләр: "Үҙе - ҡартатай булырлыҡ йәштә, ә йәш кенә балалары бар икән", - тигәндәй, аптыраулы ҡараш ташлай. Сөнки уларҙа ҡартатайҙар, өләсәйҙәр бала менән йөрөмәй, ә баланы ата-әсәһе генә йөрөтә икән. Йәштәр ғаилә ҡорғас та айырылып китәләр, ә беҙҙәге һымаҡ бергә, бер ғаилә булып йәшәү юҡ.

Сит ерҙәрҙә күп нәмәне тәү тапҡыр күргәс, яңылыҡтар күҙгә ташланып бара. Америка минең хәтеремдә йылмайған Америка булып ҡаласаҡ. Кешеләр унда йылмайып йөрөйҙәр. Әлбиттә, ул йылмайыуҙың яртыһы, бәлки, яһалмалыр. Кеше һиңә йылмайып ҡаршы килгәндә: "Һин йылмайма, йылмайыуың ысын түгел", - тип әйтеп булмай бит. Уға ла йылмаяһың. Кешеләр бер-береһенә йылмайышып, матур мөғәмәләлә йөрөйҙәр. Әлбиттә, беҙҙәге, Башҡортостандағы, тотош Рәсәйҙәге кешеләр матурыраҡ. Ә инде халыҡ шулай йылмайып та йөрөһә, тағы ла матурыраҡ булыр ине. Ләкин беҙҙең тормош хәлдәрен барыбыҙ ҙа беләбеҙ - гел генә йылмайып йөрөп булмай. Күбебеҙ асыулы. Бер-беребеҙгә ихлас йылмайып ҡарау мөмкинлектәребеҙ ҙә аҙ.

Тағы, халыҡтың ябайлығы иҫтә ҡалған. Халыҡ бик ябай унда. Һауаланыу тигән нәмә юҡ. Костюм кейеп, галстук тағып йөрөмәйҙәр. Нимә бар - шуны кейәләр, нимә теләй - шуны әйтәләр. Һиңә ниндәй мөнәсәбәте бар - шуны белдерә улар. Хәйер, насар мөнәсәбәт тә күрмәнек. Майамиҙа ҡунаҡханала йәшәгәндә ишек алдында бассейн бар ине. Шунда бер-ике рәт һыу инеп алдыҡ. Беренсе тапҡыр һыу ингәндә бер заман йыр яңғырап китте. Матур йырлайҙар. "Был тирәлә радиофәлән ишетелмәй ине", - тип һөйләнеп алдым. Ҡараһаҡ, матур ғына бер креслола йыуан ғына ҡара тәнле ҡатын йырлап ултыра. Аптырап киттек. Ул Фәриҙәнән: "Мин һеҙгә ҡамасауламайыммы?" - тип һорап алды. "Юҡ", - тине ҡатыным. Беҙгә ни, ҡыҙыҡ - тыңлайбыҙ. Иртәгәһенә асыҡ һауа аҫтындағы кафеға ашарға ингәйнек, был ҡатын да килеп керҙе. Ул да сәй эсеп ултыра, беҙ ҙә ултырабыҙ. Бер заман йәнә йырлап ебәрҙе был. "Фәриҙә, был беҙгә ғашиҡ булған, ахырыһы", - тим. Баҡһаң, ул йырламай, ә доғаларҙы шулай башҡара икән...

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Сил илдәргә барып, ғибрәт ал, тиҙәр. Сит илдә йөрөгәндә ғибрәт кенә алмайһың - уның хикмәттәрен дә өйрәнәһең. Уның үрнәк яҡтары ла бар. Ләкин хәҙерге хәлдәрҙе күреп торабыҙ - ҡулынан килһә, Америка бөтөн донъяны резервацияға ҡыуып индереүҙән дә тартынмаҫ ине. Быға оятһыҙлығы етер ине, тимәксемен. Элекке бер шиғырымды иҫкә төшөрөп, көндәлегемә: "Ҡул һелтәп бар сәйәсәткә, сығып китәм сәйәхәткә..." - тип яҙып ҡуйғайным инде. Сәйәсәткә ҡул һелтәп сыҡһам да, сәйәхәттә сәйәсәт менән дә осрашырға тура килә. Шулай итеп, бер ай буйы Америкала йөрөп ҡайттыҡ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БЕСӘЙ ЯРАТҠАНДАР... сәләмәт була

■ Америка диетологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, татлы ризыҡтар сәләмәтлеккә зыян килтермәй. Хатта йыш һәм күп итеп кәнфит ашаусыға ла йөрәк-ҡан тамырҙары сире, һимереү кеүек хәүеф янамай, былда эш тұҡланыуҙа ғына түгел, ти ғалимдар. Йәғни, татлы ризыҡ ашау һимереү хәүефе менән бәйле түгел, был турала тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың тән массаһы индексы, бил һәм май ҡатламы үлсәме күрһәткестәре һөйләй. Шулай уҡ уларҙың ҡан баҫымы, холестерин кимәле, инсулин резистентлығы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырыу хәүефе тыуҙырмаған.

■ Һалҡын тейгәндә халыҡ дауаһына өҫтөнлөк биреүселәр әйтеүенсә, эхинацея үҫемлеге экстракты иммунитетты нығытыуға ярҙам итә. Мәдисондағы Висконсин университеты (АҠШ) ғалимдары эхинацея нигеҙендәге дарыуҙарҙы тикшергән һәм уларҙың һалҡын тейеүҙән дауалай алмауын асыҡлаған. Шулай ҙа эхинацея препараттарының ауырыуҙы профилактикалауҙа файҙаһы бар. Был тикшеренеүҙәрҙе үткәреүсе белгестәр раҫлауынса, был препараттарҙың күбеһе тикшереү үтмәй һәм аҙыҡҡа биологик өҫтәмә булып тора. Әйткәндәй, киҫкен вируслы ауырыуҙар менән сирләп китеүселәр дарыуға, шул иҫәптән, эхинацея өҫтәмәләренә йылына уртаса 8 млрд доллар исраф итә. Дарыуханаларҙа үҙебеҙҙең илдә етештерелгән ябай эхинацея төнәтмәһе сит илдә етештерелгән билдәле брендтағы дарыуҙарҙан күпкә осһоҙораҡ тора. Барыһының да нигеҙендә эхинацея үҫемлеге ятҡанлыҡтан, уларҙың араһында айырма юҡ, ти белгестәр.

■ Стеналарға, йорт йыһаздарына, текстилгә һеңгән тәмәке төтөнө яман шешкә килтереүе ихтимал. Белгестәр раҫлауынса, үҙе сәләмәт йәшәү рәүеше алып барып та, тәмәке төтөнө менән һуларға мәжбүр булған кешенең ДНК-һы зарарлана һәм яман шеш барлыҡҡа килеү хәүефе арта. Беркли ҡалаһында урынлашҡан Милли лаборатория хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, тәмәке тартҡанда һауаға 4 мең тирәһе төрлө матдә бүленеп сыға, уларҙың күп өлөшө йыһаздарҙа, стенаға һеңә. Был ағыулы матдәләр канцероген тәьҫиргә лә эйә. Азот һәм азот оксиды органик берләшмәләренән торған нитрозамин төркөмө бигерәк зыянлы. Улар ДНК молекулаһы менән берләшеп, яман шеш күҙәнәктәре үҫешен барлыҡҡа килтерә.

■ Йорт хайуандары кеше һаулығының торошона яҡшы тәьҫир итә, ти белгестәр. Европа университеттары ғалимдары йорт хайуандары ярҙамында стрестан ҡотолорға, хатта психиканы нығытып, иммунитетты ла яҡшыртырға мөмкин, тип дәлилләй. Медиктар фекеренсә, бесәйҙе бер нисә минут буйына һыйпау баш ауыртыуынан ҡотолдора. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә алынған статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, өйҙәрендә эте йәки бесәйе булғандар уртаса биш йылға оҙағыраҡ йәшәй. Дөйөм алғанда, зоотерапия бөгөн күп кешеләргә сәләмәтлеген нығытырға булышлыҡ итә. Белгестәр әйтеүенсә, бесәй ауыртҡан урынды үҙе табып дауалау һәләтенә лә эйә.

ТАНЫШ БУЛЫҒЫҘ!

**Интернет селтәрендәге Bashkort 2.0 проекты Ер шарының төрлө төбәктәрендә йәшәгән, Башҡортостандан йә республиканан ситтәге аҫаба төбәктәрҙән сыҡҡан эшлекле һәм талантлы башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары тураһында һөйләй. Ошо проект аша уҡыусылар үҙенең тырышлығы һәм маҡсатҡа ынтылышы арҡаһында уңыш үрҙәренә өлгәшкән заман геройҙары менән таныша, ә ватандан ситтә йәшәүсе яҡташтар бер-береһе менән табыша.**

# ҺӘР ВАҠЫТ, ҺӘР ҠАЙҘА...

## һәм һәр нәмәлә өлгөрөргә!

**Мөнир һәм Юнир Хәмзиндәр - игеҙәктәр. Һис һүҙһеҙ, тышҡы яҡтан улар бер-береһенә бик ныҡ оҡшаған. Ә бына күңел донъяларының төрлө булыуы бер аҙ аптырата һәм игеҙәктәр бер төрлө кейенә, бер төрлө уйлай, бер һуҡмаҡтан йөрөй, бер-береһенән айырылғыһыҙ, тигән ҡалыплашҡан ҡарашты емерә. Улар һәр береһе айырым шәхес булыуҙарын мәктәп йылдарында уҡ аңлай һәм һәр аҙымда быны раҫлай йөрөй. Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында унынсы класта уҡыған саҡта, мәҫәлән, улар ятаҡтың төрлө бүлмәләрендә йәшәй. Һуңынан төрлө университеттарға уҡырға инәләр: Юнир Мәскәү дәүләт университетының химия факультетын тамамлай, Мөнир Н.Э. Бауман исемендәге Мәскәү дәүләт техник университетында инженер-технолог һөнәрен үҙләштерә. Социаль эксперимент рәүешендә, игеҙәктәрҙең һәр береһе менән айырым әңгәмә үткәрҙем. Түбәндә шул әңгәмәне тәҡдим итәм.**



**➔ Егеттәр, быйыл һеҙ тамамлаған 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының юбилей йылы, шуға ла түгел һорауым шуға бәйле булыр: һеҙҙең тормошоғоҙҙа гимназия ниндәй роль уйнаны?**

**Мөнир:** Төп ролдәрҙең береһен уйнаны, тип һис икеләнмәй әйтә алам. Киләсәккә юлды, буласаҡ һөнәребеҙҙе тап ошонда билдәләнек. Әгәр ҙә гимназия уҡытыусылары беҙҙе ваҡытында илдең баш ҡалаһы менән ҡыҙыҡһындырмаһа, моғайын да, Рәсәйҙең иң яҡшы университеттарында белем ала алмаҫ инек. Мәскәүҙә беренсе тапҡыр унынсы класта күрҙек. Гимназия-интернаттың химия уҡытыусыһы беҙҙе, дүрт уҡыусыны, Мәскәү дәүләт университетында йыл һайын үткәрелә килгән Ломоносов олимпиадаһына алып килгәйне. Призлы урындар яулауын яуламаныҡ, әммә был сәфәр хәл иткес булды: Юнир менән илдең баш ҡалаһында уҡырға ҡарар иттек. Юнир бигерәк тә Мәскәү дәүләт университетының мөхитен, уҡытыусыларын, урынлашҡан территорияһын үҙ итте, ә мин дөйөм алғанда Мәскәүҙе оҡшаттым.

**Юнир:** Баш ҡалаға килеп уҡый башлағас, уҡытыусылар беҙгә студент дуҫлығының ғүмергә хәтерҙә ҡаласағы тураһында һөйләй торғайны. Әммә быndай дуҫлыҡты беҙ гимназияла уҡыған саҡта уҡ татыныҡ. Ысын дуҫлыҡ беҙҙең яратҡан гимназия-интернатыбыҙҙа формалашты. Беҙҙең кластан тете кеше Мәскәүҙең юғары уҡыу йорттарына уҡырға инде. Һәм беҙ күп ваҡытты бергә үткәрҙек, бер-беребеҙгә терәк булдыҡ.

**➔ Мәскәүгә уҡырға бергә китһәгеҙ ҙә, һеҙ үҙегеҙгә төрлө юлды - төрлө һөнәр, төрлө уҡыу йорто, төрлө йәшәү урынын һайлағанһығыҙ, тимәк...**

**Мөнир:** Эйе, игеҙәктәр булһаҡ та, беҙ холҡобоҙ, күңел донъябыҙ, ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙ менән бер-беребеҙҙе ҡабатламайбыҙ. Быны һин ошо әңгәмә барышында ла һиҙә алырһың. Миненсә, игеҙәктәр бер-береһенән ни тиклем тиҙерәк айырылһа, шул тиклем яҡшыраҡ. Сөнки игеҙәгеҙ менән ғүмер буйы йәнәш йәшәп булмай, тормошта үҙаллы булып өйрәнергә кәрәк. Беҙ гимназияла бер класта уҡыһаҡ та, интернатта айырым бүлмәләрҙә йәшәй торғайныҡ.

**Юнир:** Беҙҙең тағы ла бер өлкән ағайыбыҙ бар. Беҙ унын менән дә оҡшаш түгелбеҙ.

**Мөнир:** Төрлө университетта белем алыу, әйләнә-тирәләге кешеләрҙең төрлө булыуы ла һиндә төрлө характер, төрлө ғәҙәттәр, донъяға төрлө ҡараш тәрбиәләй. Ғөмүмән, барыһы ла үҙеңдән тора. Беҙ шуны аңлағанға күрә лә, үҙ аҙымышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға алырға, үҙ юлыбыҙҙан барырға тырыштабыҙ.

**➔ Юғары уҡыу йортон тамамлаусыларҙың ҡайһы берҙәре, университетта уҡыу бер ни ҙә бирмәне, тип зарлана. Ә һеҙҙең фекерегеҙ нисек?**

**Мөнир:** Бауман исемендәге университетты тамамлағандан һуң мин унда алған белемемдең кәрәкле булыуын һәм ваҡытымды бушҡа үткәрмәүемде тоям. Унда алған һабаҡтарҙы хәҙер эшемдә ҡулланам. Әлбиттә, бер уҡыу йортонда алған белем менән генә сикләнеп ҡалырға ярамай, Юнир һымаҡ, төрлө өлкәлә белемеңде камиллаштырыу яҡшыраҡ.

**Юнир:** Мәскәү дәүләт университетының химия факультетында химиктикшеренеүсе өсөн кәрәкле, нигеҙле белем бирҙеләр, фекерләргә өйрәттеләр. Фән менән шөғөлләнәсәк кешегә киң мәғлүмәтле булырға һәм фекерләй белергә кәрәк тә инде. Ләкин быға өлгәшеү еңел түгел, сөнки химия физика һәм математика фәндәре кеүек формулаларға ғына буйһонмай. Шулай итеп, МДУ-ла нигеҙле белем алғандан һуң уҡыуымды Өфө дәүләт нефть техник университетында аспирантурала дауам итергә булдым. Бында алған белем өлкәһе бер аҙ икенсерәк, ләкин барыбер ҡыҙыҡлы - нефть химияһы. Университет ысынлап та ошо өлкәлә һәйбәт белгестәр әҙерләй. Бер үк ваҡытта юғары уҡыу йорто эргәһендәге Проект институтында эшләйем. Был институттағы етәкселәрем - минең уҡытыусыларым да. Был ғилми хеҙмәтемдең һөҙөмтәлелеген күтәрә.

**➔ Һеҙҙең ғаиләлә өс ул тәрбиәләнгән һәм һеҙҙең һәр берегеҙ иң кәрәкле һөнәрҙәр - химик, инженер һәм врач-хирург һөнәрҙәрен һайлаған. Белем алыуға ынтылыш, моғайын, ғаиләнән киләләр...**

**Юнир:** Эйе, ата-әсәләребеҙ беҙгә һәр ваҡыт "Уҡығыҙ!" тине.

**Мөнир:** Шул уҡ ваҡытта улар беҙҙе уҡыу буйынса ул тиклем контролдә лә тотманы, гел генә "Иң мөһиме - һаулыҡ, ә ҡалғанын кредитҡа алып була", ти торғайнылар. Ата-әсә ауыҙынан ишеткән тағы ла бер аҡыл: "Һәр ваҡыт, һәр ҡайҙа һәм һәр нәмәлә өлгөрөргә!".

**➔ Һуңғы йылдарҙа инженер һөнәрҙәренә ихтыяж үҫте, тиҙәр. Быndай ихтыяж һиҙеләме?**

**Мөнир:** Ысынлап та, яҡшы инженерҙарға ихтыяж ҙур. Ләкин инженер дипломы өсөн генә уҡырға барыуҙың мәғәнәһе юҡ, сөнки тейешле белемде тейешенсә алмайынса тороп, һин был һөнәрҙе еренә еткереп атҡара алмаясаҡһың. Мәҫәлән, университетта бергә уҡыған ун алты төркөмдәшемдең яртыһы ғына ошо хәҡиҡәттә аңлай һәм үҙ һөнәре буйынса эшкә барырға планлаштыра.

Мин машиналар төҙөү технологияһы буйынса белем алам. Минең ғилми етәксем әйтеүенсә, машиналар төҙөү - ул Рәсәй иҡтисадының йөҙәк ҡашы. Мәҫәлән, машиналар ярҙамынан тыш һин хәҙер бер аҙым да алға китә алмайһың, баҫыуҙа үҫтерелгән икмәкте лә йыйып ала алмайһың. Шунын өсөн хөкүмәт машиналар төҙөүгә ҙур сығымдар һалырға тейеш. Әлеге мәлдә мин "Росатом" атом энер-

***✓ Хәҙер күптәр сит илгә китә башланы. Ә мин үҙемдең хеҙмәтем менән сит ил иҡтисадын байытырға теләмәйем. Шул уҡ эш менән бит Рәсәйҙә лә шөғөлләнергә була.***

гияһы буйынса дәүләт корпорацияһы ҡарамағындағы Н.А. Доллежаль исемендәге Электротехника фәнни-тикшеренеү институтында эшләйем. Беҙ әлеге мәлдә көнбайыш санкцияларының тәьҫирен арыу ғына тоябыҙ, сөнки үҙебеҙҙең эшебеҙҙә сит илдең ҡырҡыусы инструменттарын ҡулланабыҙ. Ниндәйҙер уникаль технологияларҙы беҙ үҙебеҙ ҙә етештерәбеҙ һәм йыябыҙ, уларҙы башҡа илдәрҙә йыя алмайҙар. Әммә процесты тәьмин итеү өсөн ярҙамсы инструменттар, ҡайһы бер ҡулайламалар кәрәк һәм беҙ уларҙы сит илдәрҙән һатып алабыҙ. Әлеге санкциялар дауам итһә, беҙҙең эш тоткарланыуы мөмкин. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 2000 йылдарҙан алып совет заманындағы технологиялар, С.П. Королев кеүек совет ғалимдары, конструкторҙарының тикшеренеүҙәре иҫәбенә йәшәйбеҙ. Хәҙер ундай белгестәр юҡ. Беҙ мәлде ҡулдан ысҡындырғанбыҙ, шуға ла ҡайһы бер нәмәләрҙе сит илдәрҙән һатып алырға мәжбүрбеҙ.

Королев кеүек белгестәр әле лә булыр ине, бәлки, ләкин йәштәр оҙаҡ йылдар инженер һөнәренә ылыҡманы. Ҡапыл ғына заводта эшләү абруйһыҙ була башланы. Барыһы ла юридик һәм иҡтисади һөнәр үҙләштереүгә ташланды. Хәҙер иһә инженер һөнәре яңынан модаға инә башланы, күптәр техник белем алыуға өҫтөнлөк бирә. Әммә беҙ тәжрибә, белем туплағансы һәм үҙебеҙҙең тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләрен күрә башлағансы, тиҫтәләгән йылдар үтергә тейеш. Сөнки идеяны металға әйләндергәнсе, тәжрибә өлгөһө булдырғансы, артабан уны етештергәнсе оло ваҡыт һәм хеҙмәт ресурстары талап ителәсәк.

**➔ Үҙ һөнәрең менән һин бик тә ҡәнәғәт, шулаймы?**

**Мөнир:** Эйе, ҡәнәғәтмен. Ләкин, минеңсә, тулыһынса ҡәнәғәт булыу дөрөҫ түгел, хатта зарарлы. Сөнки бер ваҡыт һинең ошо шөғөлөң өлкәһендә психологик көрсөк барлыҡҡа килеүе мөмкин.Университеттағы бер уҡытыусым әйтеүенсә: "Әгәр ҙә хәҙерҙән үк тормоштағы маҡсатығыҙҙы билдәләмәһәгеҙ, бик тиҙҙән психологик көрсөк барлыҡҡа килеүе мөмкин. Һеҙ, әлбиттә, эшкә йөрөйәсәкһегеҙ, әммә ләкин ул бары тик үҙегеҙҙе аҫрау өсөн генә башҡарылған шөғөл буласаҡ. Шуның өсөн үҙ маҡсатығыҙҙы хәҙерҙән үк билдәләп ҡуйығыҙ".

**Юнир:** Ысынлап та, уҡыуҙы тамамлағандан һуң йәш кешелә ниндәйҙер бер рухи көрсөк барлыҡҡа килә икәнен үҙемдең иптәштәрем миҫалында раҫлай алам. Үҙ-үҙенде ваҡытында ҡулға алып, көйләмәһәң, һиңә нимә ҡыҙыҡлы икәнен, нимә теләүеңде билдәләмәһәң, артабан тормоштағы маҡсатыңды эҙләүгә әллә күпме ваҡыт сарыф итеүең, шул уҡ ваҡытта эшһеҙ ултырыуың мөмкин. Шуның өсөн университетты тамамлап сыҡмаҫ элек үк үҙ маҡсатыңа асыҡлыҡ индерергә кәрәк. Эшең менән параллель рәүештә ниндәйҙер өҫтәмә шөғөл дә булырға тейеш. Бөгөнгө көн менән йәшәү дөрөҫ түгел йәш кешегә, әленән үк аҙаҡ нимә эшләренде планлаштыр. Бер һүҙ менән әйткәндә, һәр нимәлә нигеҙ төҙөү кәрәк.

Мин Мәскәүҙә университетта уҡыған саҡта уҡ Өфө дәүләт нефть техник университетына аспирантураға барасағымды белә инем.

**Мөнир:** Мин әле Бауман университетының 6-сы курсында уҡыйым (беҙҙә специалитет алты йыл), быйыл тамамлайым. Йә шул уҡ Бауман университетына, йә әле эшләп йөрөгән Н.А. Доллежаль исемендәге Электротехника фәнни- тикшеренеү институтына аспирантураға инергә ҡарар иткәнмен.

**➔ Һеҙҙеңсә, ни өсөн бөгөнгө быуын йәштәренә аспирантурала уҡыу кәрәк?**

**Мөнир:** Бөгөнгө көндә һәр икенсе кеше юғары белемле. Конкурентлыҡҡа һәләтле булыу өсөн хәҙер бер юғары белемгә эйә булыу ғына етмәй. Юғарынан юғары, йәғни фәнни дәрәжә кәрәк. Әлбиттә, бөтәһенә лә түгел, ә һәләтлеләргә генә. Әгәр ҙә кеше үҙ өлкәһендә яҡшы белгес булмаһа, ул башҡаларҙы нимәгә өйрәтә ала? Ул үҙе һымаҡ уҡ яуапһыҙ белгестәр быуынын ғына тәрбиәләй аласаҡ. Шуның өсөн аспирантураға барырға кәрәк, әммә бөтәһенә лә түгел, тигән фекерҙәмен.

**Юнир:** Үҙ һөнәрең буйынса иң яҡшы булырға ынтылырға кәрәк. Ә бының өсөн шул уҡ аспирантурала белем алыуҙы дауам итеү мөһим. Үҙ һөнәреңдең бар нескәлектәренә төшөнә башлағанда ғына һин үҙеңде хөрмәт итә башлаясаҡһың...

**➔ Һеҙгә ҡасан да булһа бирелгән иң файҙалы кәңәш...**

**Мөнир:** Әсәйем беҙгә һәр ваҡыт "Оялмағыҙ!" ти торғайны. Беҙ, башҡорттар, ысынлап та ҡыйыуһыҙлыраҡбыҙ. Беҙҙең турала башҡалар нимә уйлар, кеше нимә тиер, тип көйөнәбеҙ. Мин ошо ҡыйыуһыҙлығым менән һәр ваҡыт көрәшәм. Әсәйем тағы ла: "Хаталаныуҙан ҡурҡмағыҙ. Һәр ваҡыт алға барығыҙ, ҡыйыу булығыҙ. Хаталанаһығыҙ икән, бының өсөн һеҙҙе берәү ҙә үлтермәҫ. Үҙ-үҙеңдә ҡурҡыу тойғоһо үҫтерергә ярамай", - тип әйтә торғайны.

**Юнир:** Мәктәптәге уҡытыусымдың, Мәскәүгә уҡырға барырға кәрәк, тигән кәңәше ҙур роль уйнаны. Мәктәптә уҡығанда уҡ, ил баш ҡалаһында юғары белем аласаҡмын, тигән ҡарар беҙҙең уҡыуҙа өлгәшеүгә лә йоғонто яһаны. Учалыла уҡығанда минең бер "өслө" була торғайны. Ә гимназия-интернатта унынсы-ун беренсе кластарҙа уҡығанда мин "отличник" инем инде. Сөнки яҡшы уҡыуға сәбәп барлыҡҡа килде. Йәш кешегә ваҡытлы һәм дөрөҫ бирелгән кәңәштең ни тиклем мөһим икәнен үҙ миҫалымдан беләм, шуға ла мәктәп уҡыусыларын ныҡлап шөғөлләнергә, һәр нәмәне үҙ ваҡытында эшләргә саҡырам.

**➔ Белем алыуҙы сит илдә дауам итергә тигән уй юҡмы?**

**Мөнир:** Мин ярты йыл тирәһенә генә сит илгә барып, сит телде өйрәнергә, ундағы тормош менән танышырға риза булыр инем. Әммә шунан да артыҡ түгел. Хәҙер күптәр сит илгә китә башланы. Ә мин үҙемдең хеҙмәтем менән сит ил иҡтисадын байытырға теләмәйем. Шул уҡ эш менән бит Рәсәйҙә лә шөғөлләнергә була. Әлбиттә, шундай парадокс та күҙәтелә: Рәсәй Хөкүмәте белемле кешеләрҙең сит илгә китеүенә туҡтауһыҙ зарлана, ләкин белем алыу системаһын йәш кеше еңел генә ситкә китерлек итеп ҡуллайлаштырыуҙы дауам итә. Бакалавриат һәм магистратура системаһын күҙ уңында тотам. Был беҙгә сит илдән килгән система. Рәсәйҙә дүрт йыл бакалавриатта уҡып, һин ике йылға сит илгә магистратураға уҡырға китә алаһың. Ә магистратуранан һуң йәштәрҙе сит илдә тороп ҡалырға ылыҡтырыусы нәмәләр байтаҡ. Ғөмүмән, йәш кеше үҙенең сит илгә ҡарағанда үҙ ватанында кәрәгерәк икәнен һәр ваҡыт тойорға тейеш.

**➔ Мәскәү биргән һабаҡтар ниндәй?**

**Юнир:** Һәр ерҙә, һәр ваҡыт һиңә рухи таяныс биреүселәр - улар тыуған ер, ата-әсә, туғандарың икәнен тағы ла нығыраҡ аңланыҡ. Унан һуң, Мәскәүҙә йәшәгәндә баяғы оялсанлыҡты оноторға, үҙеңдә етеҙлек һәм ҡыйыулыҡ тәрбиәләргә кәрәк булды. Бер ниндәй ауырлыҡ һәм проблема алдында ла юғалып ҡалмаҫҡа кәрәк икәнен аңланыҡ.

**Мөнир:** Минең һабаҡ шул булды: әгәр ҙә һин нимәләлер икеләнәһең, нимәлер оҡшап етмәй икән, ул хәлде үҙгәртеү яғын ҡара, кисектермә. Мин тәүҙә документтарымды Мәскәү дәүләт университетына тапшырғайным, күңелемдә ҡапыл ғына, миңә Бауманкаға барырға кәрәктер, тигән уй барлыҡҡа килде. Был икеләнеүем тынғы бирмәне һәм бер төн эсендә ҡарарымды үҙгәртеп, Бауман исемендәге университетҡа документтарымды алып барҙым, шунда уҡырға индем һәм был ҡарарыма бер ваҡытта ла үкенмәнем.

**➔ Заман йәштәрендә һеҙгә нимәләр оҡшамай?**

**Юнир:** Беҙҙең йәштәрҙең йыш ҡына икенсе милләт вәкилдәренә оҡшарға тырышыуы менән осрашырға тура килә. Беҙҙең үҙ милләтебеҙ, үҙ йолаларыбыҙ, үҙ телебеҙ бар, һәм улар менән ғорурланырға кәрәк.

**➔ Милли үҙенсәлектәрегеҙ, тамырҙарығыҙ һеҙҙең эшегеҙгә, уҡыуығыҙға йоғонто яһаймы?**

**Юнир:** Университетта уҡыған саҡта беҙ Башҡортостандан килгән өс студент бер төркөмдә уҡыныҡ. Беҙ шул тиклем берҙәм инек һәм ошо берҙәмлек беҙҙең тирәләй башҡаларҙы ла тупланы. Тәүҙә барыһы ла башҡорттарҙы ҡайҙандыр Кавказдан килгән халыҡ тип иҫәпләй ине. Аҙаҡ иһә беҙ матур тәртибебеҙ, ихласлығыбыҙ менән уларҙы йәлеп итеп, Башҡортостан тураһында һөйләп, аңлатып, бөтөнләй был стереотиптарҙы юҡ иттек.

**Мөнир:** Мин үҙемдә тойған милли үҙенсәлектәрҙең береһе - ул хеҙмәтте яратыу һәм һәр эште илке-һалҡы түгел, ә еренә еткереп эшләү ғәҙәте. Былар, әлбиттә, миңә ныҡ ярҙам итә.

**➔ Үҙегеҙҙең тормош вазифағыҙҙы нимәлә күрәһегеҙ?**

**Юнир:** Мин үҙ вазифамды башҡаларҙы үҫтереүҙә күрәм. Нигеҙ төҙөргә, ғаилә ҡорорға, балаларымды белемле итеп тәрбиәләргә теләр инем.

**Мөнир:** Минең вазифам - үҙемә тиклем булмаған ниндәйҙер яңы асыш яһауҙалыр. Һәм, әлбиттә, матур ғаилә ҡорорға хыялланам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Заман геройҙары эҙләйбеҙ, тип саң ҡағырға яратабыҙ, йыш ҡына уларҙың йәнәшәбеҙҙә йөрөгәнен шәйләмәйбеҙ. Беҙҙең бөгөнгө ҡоробоҙҙоң белемле, фекерле, һөнәрле ҡунаҡтарын заман геройҙары итеп иҫәпләп булмаймы ни? Тап улар һымаҡ илебеҙҙең төрлө тарафтарында йәшәгән, төрлө һөнәр үҙләштергән, профессиональ һәм шәхси камиллыҡҡа өлгәшкән йәштәр генә халҡыбыҙҙың үҫешенә тос өлөш индерәсәк, милләтте бар донъяға танытасаҡ. Ошондай үҙ иңенә замандың барлыҡ мәшәҡәт-хәстәрҙәрен йөкмәргә әҙер йәштәребеҙ күберәк булһын ине, тигән теләктә ҡалам.**

**Фатима ЯНБАЕВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Байыуҙың метафизик элементы

